*✓ Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru  2002 йылдан башлап сыға  Һатыуҙа хаҡы ирекле  №15 (381)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Географияны киңәйтәм, тип,**

идеологияны тарайтмайыҡсы әле...



2

**Киләсәк үҙгәрештәрҙән башлана,**



йәки Өсөнсө ҡоролтайҙа күтәреләсәк проблемалар тураһында

8-11

**Үҙемде мин, донъя мөхәббәттән**

Ҡотайыр, тип хәҙер йыуатам...



11

**"Хазина" поэмаһы...**

шиғри театрға нигеҙ һалды



16

14 **ТВ-программа**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Катнаш никахтар беҙҙең милләттең бер бәләһе икәнен таныйһығыҙмы?

***Шәүрә МУСИНА, Шишмә районы Хәжәт ауылы:***

- Нимә генә тимә, ҡатнаш никах ҡорғанда, барыбер ҙә милләтте айырыу килеп сыға ул, ә бүрәнәнең ауыр яғы балаға төшә. Татар әсәйҙән һәм башҡорт атайҙан тыуған бала булараҡ, мин уны үҙ иңемдә татып, бәләкәйҙән уларҙың бер-береһенә ҡарата кәмһетеү һүҙҙәрен ишетеп үҫтем. Ғауға ҡупһа, әсәйем атайымды: "Ах, һин, ялҡау башҡорт", - тип әрләр ине. Ә балалар мине: "Татар, татар тарама, килмә беҙҙең араға", - тип эләкләй торғайны. Шуға ла башҡорт ҡыҙы башҡорт егетенә сыҡһын, тип теләйем. Хәҙерге заманда шул тиклем аҡыллы, егәрле, эшлекле башҡорт егеттәре күп. Ирем менән дүрт ҡыҙ үҫтерҙек. Өлкәне башҡорт егетенә сыҡты. Тимерхан тигән ул үҫтерәләр. Ҡалғандарына ла үҙебеҙҙең милләткә кейәүгә сығаһығыҙ, тип әйтеп торам.

***Нәжибә ӘБСӘЛӘМОВА, Баймаҡ районы Түбә ҡасабаһы:***

- Ысынлап та, беҙҙең милләттең бәкәленә һуҡҡан проблема был. Ҡайһы милләт менән генә ғаилә ҡорғанда ла беҙҙең башҡорт юғалтыу кисерә. Бындай ғаиләләрҙә теле лә, мәҙәниәте лә, милли рухы ла булмаған балалар үҫә. Был электән үк милләтте бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәт булғандыр ул. Минең әсәйем дә беҙгә, башҡортҡа кейәүгә сығырға кәрәк, тип әйтә торҙо. Балаларым да башҡорт ғаиләһе ҡорҙо. Уларға күркәм исемдәр ҡуштыҡ - Шәүрә, Иҙел, Урал, Миләүшә. Ейәндәремдең исемдәре шул тиклем матур - Байрас, Ғайсар, Фирүзә. Балаға исем биреү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Мин берәйһенең балаһы тыуһа, иң тәүҙә исеме кем, тип һорайым һәм шул ҡушҡан исеме буйынса уларҙың мәҙәни кимәлен билдәләйем.

***Йәмилә СӘЛИХОВА, Өфө ҡалаһы:***

- Ҡатнаш никахтың ни тиклем ҙур проблема тыуҙырасағын мин үҙем аша кисереп аңланым. Оҙаҡ йылдар сит милләттән булған егет менән бер-беребеҙҙе ятышып, осрашып йөрөнөк. Эш өйләнешеүгә барып еткәс, мин үҙемдән бигерәк, милләтем алдында ни тиклем яуаплы аҙым яһауымды аңланым. Әгәр ҙә мөхәббәт, тип, сит милләткә кейәүгә сыҡһам, ғүмер буйы үҙемде һатлыҡ йән итеп тойоп, мәңге ғазап сигеп йәшәрмен, тип уйланым. Шул мәл яратҡан кешем менән булыуға ҡарағанда, үҙ телемдә аралашыу, балаларымдың миңә "әсәй" тип әйткәндәрен ишетеү теләге көслөрәк булып сыҡты. Шулай итеп, йөрәгемдә үҙ ваҡытында уянған милләт, ер тойғоһо мине оло бәләнән ҡурсып ҡалды. Хәҙер күңелем тыныс, донъям бөтөн. Янымда яратҡан ирем, "әсәй", тип йүгереп йөрөгән балаларым бар. Йәш ҡыҙегеттәргә кәңәшем шул: мөхәббәт тип, сит милләткә алданмағыҙ, үҙ милләтең менән йәшәгәндә генә ысын ятыу тойғолары уяна, быны мин үҙем кисергән кеше булараҡ әйтәм.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

АФАРИН!

# ҺӨНӘРЕМ - ЯҘМЫШЫМ...

## тип йәшәй уҡытыусы

**Өфөлә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2010" төбәк-ара конкурсы тамамланды. БР Мәғариф министрлығы ойошторған был конкурс быйыл ун бишенсе тапҡыр үтә һәм башҡорт теле уҡытыусыһының абруйын күтәреүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Быйыл конкурста республика ҡала һәм районларынан, күрше Силәбе, Ырымбур һәм Свердловск өлкәләренән 63 уҡытыусы ҡатнашты. Уларҙың һәр береһе педагогик оҫталығын төрлө ярыш төрҙәрендә: асыҡ дәрестәр, лекциялар, инновацион проекттарҙа күрһәтте.**



(Дауамы 4-се биттә).

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

### БАШҠОРТЛОҠ

Эй, егеттәр, ҡыҙҙар! Ҡандай ихлас
Бейенегеҙ башҡорт бейеүен.
Һәр ҡайһығыҙ иҫбатланы булды
Үҙ халҡына булған һөйөүен.

Һәр хәлдә, мин шулай теләнем.
Юҡһа, тотоп башҡорт ҡурайҙарын,
Ябынышып башҡорт еләнен,
Сәстәренә толом ҡушып үреп,
Сәхнә биләүҙәрен беләмен.

Кейемдәрҙе кейеү генә түгел,
Башҡорт, тиеп, яҙып паспортын...
Аҡ йорттарҙан тороп аҙмы түрә
Башына етте аҙмы башҡорттоң.

Ә бына һеҙ!..
Сәхнәлә, һеҙ, кәмендә - Салауат,
Ҡыҙҙарығыҙ, хас та - Әминә.
Салауаттың анау ыҙалары,
Ә башҡорттоң күргән нужалары
Таныш ҡайһығыҙҙың тәненә,
Таныш ҡайһығыҙҙың йәненә?

Һеҙ ҙә алдаһағыҙ... - Йәнем сатнар,
Телен белмәй үҫер ейәнемдәй,
Илен белмәй үҫкән улымдай.
Эй, башҡортлоҡ! Сәхнәләрҙән
төшкәс,
Сисеп ырғытылған еләнендәй,
Һүтеп ырғытылған толомдай.

**Рәйес ТҮЛӘК.**

✓ ***Сит яҡтарҙа ҡатнаш ғаилә ҡороп, балалары менән рус йәки башҡа телдә һөйләшкән милләттәштәребеҙҙе саҡырып, бүләкләп ҡайтарырғамы ни инде хәҙер уларҙы?***



*МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ*

**Быйылғы йыл Республика йылы иғлан ителде. Федераль үҙәктән төрлө шомло хәбәрҙәр яңғырағанда, беҙҙең әүҙем йәштәребеҙ, лидерҙарыбыҙға ҡарата ниндәйҙер аңлайышһыҙ әшәкелектәр ҡылынғанда, Республика йылы иғлан ителеүе хәҙерге ваҡытта оло байрам, оло туй түгел, ә милли үҙаңыбыҙҙың икенсе кимәлгә күтәрелеү ихтыяжының, берҙәмлек һәм әүҙемлек күрһәтеү зарурлығының, милли сәйәсәтебеҙҙең икенсе алымдарын үҙләштереү кәрәклегенең йылы булырға тейеш. Быныһы һәр башҡортҡа көн кеүек асыҡ. Һәм тап ошо маҡсаттар менән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйыла, тигән ышаныста йәшәлә ине. Әммә...**



# ГЕОГРАФИЯНЫ КИҢӘЙТӘМ, ТИП,

## идеологияны таратмайыҡсы әле...

"Ватан" яңылыҡтар сығарылышын ҡарауым. Белоруссияла, Минск ҡалаһында йәшәп ятыусы Ләйсән Аброськина, Зилиә Шендерович кеүек ханымдар заманында романтик сәйәхәт менән сит яҡтарға юлланып, икенсе милләттәргә кейәүгә сыҡҡандар ҙа, оло йәшкә етә башлағас, моңайышып, һағынышып, "Шишмә" тигән ойошма ойошторғандар. Ҡоролтайға арналған репортаж был ханымдарҙы күтәрә һәм маҡтай.

Бына тағы эсем бошоп, бер башҡорт журналын асып ҡарайым. Ҡоролтайға арналған материалда бер башҡорт ҡыҙының Европа илдәренең берениндә кейәүгә сығып йәшәүе, нисек бәхетле икәне хаҡында матур, ентекле бәйән ителә.

Бик күңелһеҙ һығымталар яһала, әлбиттә. Ошо егерме йыл эсендә кемдең кем икәне, ҡайһы ойошма нисек эшләгәне, ниндәй милләттәштәребеҙ ауылдарына, тыуған яғына ниндәй ярҙам күрһәткәне һәр беребеҙгә мәғлүм. Беҙ миллион булһаҡ та, һәр кемебеҙ күҙ алдында. Әйтәйек, Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург, Пермь башҡорт ойошмаларының эшмәкәрлеге һоҡландыра. Себерҙә эшләгән айырым милләттәштәрбеҙҙең тыуғандарына, ауылдарына, мәктәптәренә ярҙам күрһәтеүҙәре билдәле. Ә инде үҙ балаларын - Андрюшенька, Катенька, Изечка, Поли һәм Джонниҙарын үҫтереп, олоғайған көндәрендә моңайышып ултырған милләттәштәребеҙгә нишләп беҙ шундай иғтибар бирәбеҙ әле?

Сит яҡтарҙа ҡатнаш ғаилә ҡороп, балалары менән рус йәки башҡа телдә һөйләшкән милләттәштәребеҙҙе саҡырып, республиканың бик күп ысын патриоттары күрмәгән хөрмәтте уларға күрһәтеп, бүләкләп ҡайтарырғамы ни инде хәҙер уларҙы? Рәхмәт һеҙгә, Шендерович-Абрамович-Иванова ханымдар, ностальгия тойғоһо өсөн, тип баш эйәйекме?

Башҡорттарҙың тәүге ҡоролтайында: "Аһ, башҡорттар Австралияла ла, Японияла ла, аһ, хатта Африка менән Көньяк Америкала ла йәшәй!" - тип аһылдашып, ошо факттарға ҡыуанып, күкрәк һуғып алдыҡ бит инде. Ул ваҡытта, әлбиттә, үҙаңды үҫтереү өсөн бөтә Ер шарының башҡорттарын йыйыу кәрәк булғайны.

Ә бөгөнгө көндә, Республика йылында үткән ҡоролтайҙа, милләтебеҙ алдында торған бурыстар барыбер ҙә икенсе. Ошо егерме йыл эсендә башҡорт телен ғаилә теле итеүсе егет-ҡыҙҙарыбыҙ, ысын патриоттар, ысын алмаш быуын үҫте. Егерме йыл - аҙ ваҡыт түгел, ул быуындар алмашыуын күҙәтерлек ваҡыт. Кемдең балалары йөрөй тәүге рәттәрҙә, кемдең балалары башҡорт мәктәптәрендә уҡый? Кемдең ейәндәре башҡортса һөйләшәлә, кемдең ейәндәре, милләтем, тип, сит-яҡтарға түгел, ә республикабыҙҙа эшләй? Аҡса өсөн дә, дан өсөн дә түгел, ә үҙебеҙҙең еребеҙҙе, үҙебеҙҙең баш ҡалабыҙҙы ташлап китергә намыҫы етмәгән шәхестәребеҙ улар. Билдәле шәхестәрҙең һәр кеменән һораһағыҙ - ишетерһегеҙ: уларҙың һәр кемеһенә сит илдәргә лә, Ҡаҙан тарафтарына ла, башҡа өлкәләргә лә яҡшы эш, ҙур аҡса тәҡдим итеүселәр булған. Әммә республикабыҙ, башҡорт иле хаҡына улар бында йәшәй. Эшләй. Уйлана. Көрәшә. Эйе, көрәшә. Һәм уларға ниндәйҙер маҡсаттарына өлгәшеү еңел бирелмәй. Башҡортҡа бер ваҡытта ла бер нәмә лә еңел бирелмәгән. Бына ошоға, проблемаларыбыҙҙы бер аҙ еңеләйтеүгә булышлыҡ итергә тейеш был ҡоролтайҙа ҡабул ителәсәк документтар.

Хәҙерге заманда, шомло заманда уйҙырма демократия уйындары менән мауыҡмайыҡ әле. Эйе, беҙҙең республика, беҙҙең хөкүмәтебеҙ сәйәсәте - толерантлыҡтың иң юғары сағылышы. Быныһын хәҙер иҫбат итергә лә түгел, был донъя кимәлендә өйрәнелә башлаған тотороҡло, юғары күренеш. Суверенитетыбыҙҙың иң оло ҡаҙанышы. Тик ҡатнаш ғаиләләрҙе данлауҙың толерантлыҡ төшөнсәһенә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Рух һәм патриотлыҡ төшөнсәләренә лә ҡыҫылышы юҡ.

Ҡоролтай - Башҡорттар ҡоролтайы - ул беҙҙең башҡорт халҡының мәсьәләләрен асып бирергә тейеш оло кәңәшмә. Хәҙерге заманда ҡоролтайҙың төп принцибы республикабыҙҙың ысын патриоттарын йыйыу һәм беҙҙең милләтте күтәргән башҡа өлкә, сит ил ғалимдары, сәйәсәт, мәҙәниәт эшмәкәрҙәрен йыйып, уларҙың хеҙмәттәренә, ғилми эштәренә, төрлө кимәлдәге сараларға булышлыҡ итеү, улар менән артабан тығыҙ бәйләнештә булыу, тип уйлайым.

Хөрмәтле милләттәштәрем, ҡоролтайҙы ойоштороу комитеты ағзалары! Төшөнсәләрҙе бутамай, ҡоролтайҙы байрам итеп түгел, ә ата-бабаларыбыҙ иң ауыр замандарҙа үткәргән оло ҡор, йыйын итеп үткәрһәк ине. Географияны киңәйтәйек, тип, идеологияны таратмайыҡсы...

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

*ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН*

YOKA press

### Ишембай

Йүкә телефон аша тағы ла шундай хикмәтле үә ғибрәтле хәбәр алдыҡ: үткән аҙнала Торатау итәгендә Ҡар бабайҙар съезы булып үткән икән. "Торатауҙы һаҡлайыҡ!" тигән девиз менән барған халыҡ хәрәкәтенә теләктәшлек белдереп, бында йөҙҙән ашыу Ҡар бабай йыйылған. Торатау именлегенә ҡул һуҙыусыларҙы иҫкәртеү маҡсатында улар, әгәр ҙә беҙҙең акция һанға һуғылмаһа, яңынан ҡыш яһайбыҙ һәм Торатауҙы йырып үткеһеҙ ҡар стена менән уратып алаcаҡбыҙ, тигән резолюция сығарғандар, ти. Ышанмаһағыҙ, һүрәткә ҡарағыҙ: Ҡар бабайҙарҙың Торатау съезынан күренеш.



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Рәсәй Федерацияһы Именлек Советының һәм Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы советтың Ульяновскиҙа үткән берлектәге күсмә кәңәшмәһе эшендә ҡатнашты. Ульяновскиҙың "Авиастар-СП" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте авиация предприятиеһында үткән кәңәшмәлә авиация эшмәкәрлеге өлкәһендәге дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу сиктәрендә милли именлек мәсьәләләре тикшерелде.

✓БР Хөкүмәте ултырышында яҙғы ташҡынға әҙерлек мәсьәләләре ҡаралды. Роспотребнадзорҙың Башҡортостан идаралығы етәксеһе Роберт Таҡаев белдереүенсә, быйылғы ташҡын осоронда 10 мең самаһы кеше йәшәгән 63 биләмәлә 3 меңгә яҡын йортто һыу баҫыуы ихтимал. Бигерәк тә хужаһыҙ гидротехник ҡоролмалар етди проблема тыуҙыра. Башҡортостандың 22 районында ошондай 11 ҡоролма бар. Ташҡын көслө булған осраҡта улар эргәһендәге торлаҡ йорттарҙы һәм хужалыҡ субъекттарын һыу баҫыу хәүефе бар. Шуға ла хакимиәт башлыҡтарына ул ҡоролмаларҙы милеккә тапшырыу мәсьәләһен тиҙерәк хәл итеү зарурлығы бар.

✓1 апрелдән Рәсәйҙә хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһы башланды. Ул 15 июлгә саҡлы дауам итәсәк. Бөтөн ил буйынса 270 мең егет армияға саҡырыласаҡ. Ҡораллы Көстәр сафына Башҡортостандан быйыл 8250 егет хеҙмәткә алынасаҡ, тип көтөлә. Көҙгө саҡырылышта республикала 41 мең кеше медицина комиссияһы үткән, шуның 13 меңе хеҙмәткә яраҡлы, 18 меңе ваҡытлыса яраҡһыҙ тип табылған. Хәрби хеҙмәткә яҫы табанлылыҡ, нервылар системаһы, эндокрин, психик һәм һөйәк-мускул системаһы ауырыуҙары менән яфаланған егеттәр саҡырылмай. 2009 йылда республиканың йыйылма пунктынан частарға оҙатыр алдынан төрлө ауырыуҙар һөҙөмтәһендә 693 кеше хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип, кире ҡайтарылған.

✓Республикала әсәлек капиталына сертификат алыуға хоҡуҡ бирелгән балаларҙың һаны 78639-ға еткән. Шуларҙың 74617-һе сертификат алыуға ғариза биргән. Был сертификатҡа эйә булыусыларҙың 5710-ы сертификатты йорт төҙөгәндә йәки һатып алғанда бирелгән ипотека кредитын ҡаплауға йүнәлтергә теләп ғариза биргән.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# "ТЕРРА ЭКСТРЕМИСТИКА",

## йәки тотош халыҡты бандит итер өсөн ни эшләргә кәрәк?

**Мәскәүҙә "Терра" нәшриәте бар икән. Быға тиклем белмәй торғайным. "Терра" - латинсанан территория, йәки ер биләмәһе. Мәҫәлән, терра инкогнита - билдәһеҙ ер. "Терра" нәшриәте энциклопедиялар нәшер итеү менән шөғөлләнә. Тимәк, атамаһын иҫәпкә алһаң, ерҙәр тураһында яҙа. Иң мөһабәт проекты - "Ҙур энциклопедия" 60-тан ашыу томдан тора. Унда бөтә нәмә тураһында мәғлүмәт табырға була, имеш. Реклама менән шөғөлләнә башланы микән был, тип уйлайһығыҙмы? Эйе, был мәҡәләне бер ни тиклем реклама тип атарға ла булалыр. Дөрөҫөрәге, АНТИреклама.**

Энциклопедияларға ышаныуға буламы? Әлбиттә, тиерһегеҙ. Унда бит тик ҡабат-ҡабат тикшерелгән мәғлүмәт кенә урынлаштырыла ла баһа. Энциклопедияларҙың авторҙары, ғәҙәттә, ғалимдар, үҙ эшен яҡшы белгән, һәр бер һүҙҙе, һәр мәғлүмәтте, факты ентекләп тикшергән кешеләр. Бәҡтиһән, ҡайһы бер энциклопедияларға ышанырға мөмкин түгел. Айырыуса илебеҙҙең, йәки айырым төбәктәрҙең, йә булмаһа, ҡайһы бер халыҡтарҙың тарихына ҡағылышлы мәҡәләләрҙе бик ентекләп уҡырға кәрәк. Һәр нөктәһенә, өтөрөнә тиклем. Юғиһә...

Хәйер, һүҙҙе баштан башлайыҡ. Үткән аҙнала Грозныйҙың Завод районы суды "Терра" нәшриәтендә баҫтырылған "Ҙур энциклопедия"ның 58-се томын экстремистик әҙәбиәт тип тапты һәм Рәсәй Федерацияһының Юстиция министрлығына был китапты экстремистик материалдарҙың федераль исемлегенә индерергә, ә һатыусыларға был томды ирекле һатыуҙан алырға тәҡдим итте.

Ни булған был томға, тип һорарһығыҙ, моғайын. Ни өсөн ул энциклопедия чечендарға оҡшамаған икән? Унда Чечен республикаһы тураһында мәҡәлә донъя күргән дә баһа. Ун өс битлек материалда Чечняның тарихы һәм бөгөнгө көнө һүрәтләнгән икән. Тап ошо материал чечендарға оҡшамай ҙа инде. Тап ошо материал арҡаһында Грозный ҡалаһында ҙур шау-шыу ҡупҡан. Суд фекеренсә, был мәҡәлә чечен халҡының тарихын тупаҫ рәүештә боҙоп күрһәтә һәм Төньяҡ Кавказ халыҡтарына ҡарата дошманлыҡ һәм күрә алмауҫанлыҡ тойғолары уятырға һәләтле.

"Терра" нәшриәтенең Ҙур энциклопедияһы хаҡында әйтеп үтергә кәрәктер. Ул 2000 йылдан бирле тупланған һәм 2006 йылда 150 мең дана менән донъя күргән. 62 томдан тора. Энциклопедияла 160 мең мәҡәлә, улар өҫтөндә 500-ләп автор эшләгән. Энциклопедияның ғилми-нәшриәт советының етәксеһе - Рәсәй фәндәр академияһының вице-президенты Геннадий Месяц. Энциклопедия баҫтырған өсөн нәшриәттең етәксеһе Мәскәү ҡалаһының әҙәбиәт һәм мәҙәниәт өлкәһендәге премияһына эйә. Бик хуп, бик мәслихәт. Шулай бит? Шул уҡ ваҡытта Чечен Республикаһы тураһындағы мәҡәләнең, һәм, гөмүмән, энциклопедияның башҡа мәҡәләләренең авторҙары күрһәтелмәгән. Тимәк, яуапҡа тарттырырлыҡ кеше лә юҡмы? Авторҙың тарихсымы, әллә сәйәси тикшереүсеме икәнен дә белеп булмай. Чечендар тураһында ни яҙғандар һуң, тип һорайһығыҙмы? Рәсәй фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институты директоры В.В. Наумкин һәм чечендар тураһындағы материалды анализлаған башҡа фәнни эксперттар фекеренсә, мәҡәләлә бөгөнгө йөмғиәттә чечен халҡына ҡарата тупланған негатив стереотиптарҙың барыһы ла урын алған. Мәҡәлә менән танышып сыҡҡас, чечендар бер ҡасан да ер һөрмәгән, мал көтмәгән, ә бары тик кеше талау менән генә шөғөлләнгән тигән, фекер тыуа. Автор, мәҫәлән, XVII-XVIII быуаттарҙа чечен тейптары үҙ аллы йәшәгән һәм башлыса күрше халыҡтарҙы талау менән көн иткән, тип яҙа. Уның логикаһына ярашлы, башҡорттарға барымта менән сапҡан ҡаҙаҡтар ҙа, уларға ҡарымта менән барған башҡорттар ҙа - чечендар кеүек үк бандит халыҡ. Энциклопедияға ярашлы, чечендар һәр ваҡыт һуғышҡан - йә үҙара, йә күршеләр, йә Рәсәй менән. XVIII быуаттағы баш күтәреүҙәр урыҫтарға ҡаршы ойошторола, тип раҫлана, ә уна ҡатнашыусыларға иһә ислам фанатиктары атамаһы тағыла. Автор Кавказ һуғышы темаһына ла ҡағылып үтә. Имам Шамил, мәҫәлән, Британия империализмының агенты булараҡ һүрәтләнә. Тағы ла автор чечендар хаҡында "1870-се йылдар аҙағына чечен ир-егеттәренең бөтәһе лә тиерлек абрек, йәғни бандиттар булып китә һәм үҙҙәренең енәйәтселеген милләтсел демагогик фразеология артында йәшерә", тип раҫлай. Революция һәм совет осоро ла, көслө сәйәси золомдар ваҡыты ла автор тарафынан ошондай уҡ позицияларҙан сығып күрһәтелә. Мәҫәлән, мәҡәләлә чечендар Гитлерҙы һағынып көтә, хатта уның өсөн алтындан эшләнгән эйәр һалынған буҙ арғымаҡты әҙерләп ҡуя, тип белдерелә. Һынлап та, тотош халыҡ репрессияға дусар ителгәс, совет халҡы араһында махсус рәүештә шундай хәбәр таратыла. Һынтарихсы милләт хаҡындағы материалын тарихи гәйбәттәргә таянып яҙырға тейеш түгел дә баһа.

Чечен халҡы тәүҙә азатлыҡ өсөн көрәште һуғыш яланында, тауҙарҙа һәм ҡырҙарҙа, ҡулдарына ҡорал тотоп федераль көстәргә ҡаршы алып барғайны, бөгөн улар... федераль кимәлдәге нәшриәт менән көрәшергә мәжбүр.

Чечендарҙан - үҙебеҙгә, Кавказ тауҙарынан Уралға әйләнеп ҡайтайыҡ. Бөгөн билдәле интернет-сайттар тарафынан махсус рәүештә таратылған ҡотҡо хәбәрҙәр, провокацион атамалар, күрәләтә тороп башҡорт халҡының һәм Башҡортостандың тарихын боҙоп күрһәтеүҙәр, халыҡ тураһында туҙға яҙмаған уйҙырмалар туплау һәм йыйыу даими төҫ алды. Беҙ быға иғтибар ҙа итмәҫкә тырышабыҙ. Йәнәһе, уларға бәйләнһәң, буялырһың ғына. Асылда иһә интернетта булдырылған яһалма стереотиптар (башҡорттар - белемһеҙ халыҡ, тарихһыҙ халыҡ, уларҙың милли геройҙары - бандиттар, уларҙың баш күтәреүҙәре, восстаниелар урыҫ халҡына, башҡа халыҡтарға ҡаршы милләтсел сығыштар һәм башҡалар) иртәгәме, иртәнән һуңғамы берәй энциклопедияла йәки тарих тураһындағы китаптарҙа, белешмәләрҙә донъя күрмәҫ, тимә. Йәғни, беҙҙе күрәләтә тороп үҙен-үҙе яҡларға, оборона тоторға мәжбүр итәләр. Тиң ҡарарға теләмәйҙәр.

Был хәлдә беҙгә, Рәсәй биләмәләрендә йәшәгән милләттәргә, дәүләт сәйәсәте менән бер уртаҡлығы булмаған осраҡлы күренеш, тип аңлатмаҡсылар. Мәҙәниәтһеҙлек, тип күрһәтмәкселәр. Асылда иһә дәүләт милләт-ара татыулыҡ, милли ризалыҡ тигән һүҙҙәр артына йәшеренә һәм илебеҙҙә тамыр йәйеп барған урыҫ шовинизмы, милли тар күңеллелекте абайламаҫҡа тырыша. Аңлашыла, Хөкүмәттең бойороғо йәки Президент указы менән халыҡтарға бер-береһен яратырға, ихтирам итергә, хөрмәтләргә бойороп булмай. Һис юғында милләттәр өҫтөнән көлөүҙе, уларҙың тарихын фальсификациялауҙы, боҙоп күрһәтеүҙе, мәсхәрәләүҙе туҡтатырға ине. Әллә быға ла көстәре етмәйме? Әллә теләктәре юҡмы?

**Таһир ИШКИНИН.**

*ХОККЕЙ*

# ҺУҢҒЫ МИНУТТАР...

## хәл итте

Континент хоккей лигаһы командаларының көнсығыш конференцияһында финал уйындары "Салауат Юлаев" клубы өсөн үтә уңышһыҙ башланды. Дөрөҫ, "Салауат Юлаев" менән Ҡаҙандың "Аҡ барыҫ" командаларының көс һынашыуы һәр ваҡыт мауыҡтырғыс, көсөргәнешле була. Әлеге финал ярыштарында юлаевсылар бер-бер артлы өс уйында отолор, тип кем уйлаған - көйәрмәндәр һәр хәлдә бары тик енеү көттө.

Ә ысынбарлыҡ бөтә хыялдарҙы селпәрәмә килтерҙе. Юлаевсылар тәүҙә ике тапҡыр үҙ майҙанында отолдо, Ҡаҙанда үткән өсөнсө уйында тағы еңелде. Еңеү иҫәбе "Аҡ барыҫ" файҙаһына: 3:0.

Бары тик 4-се уйында ғына юлаевсылар уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды һәм Ҡаҙан хоккейсыларын 4:2 иҫәбе менән отто. Хәҙер еңеү-еңелеү иҫәбе ҡаҙандар файҙаһына 3:1.

"Салауат Юлаев" финал ярыштарының 5-се уйынын үҙ майҙанында үткәрҙе. "Аҡ барыҫ" менән үтә мөһим матчта бары тик енергә тейеш, әгәр, отолһа - артабанғы уйындарҙан төшөп ҡала.

Беренсе осорҙа юлаевсыларҙың аҙсылыҡта ҡалыуын ҡаҙандар оҫта файҙаланды. Нико Капанен һуҡҡан шайбаны Александр Еременко тота алмай ҡалды һәм ҡунаҡтар алға сыҡты. Икенсе осорҙа һәр ике яҡтың береһе лә ҡаршы яҡ ҡапҡаны аса алманы.

Матчтың яҙмышы бары тик өсөнсө осор бөтөр алдынан ғына хәл ителде. Тәүҙә Игорь Григоренко Александр Радулов һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына йүнәлтте. Бындай уңыш майҙан хужаларын илһамландырып ебәрҙе һәм Александр Радулов Петри Веханин ҡапҡаһына еңеү шайбаһын индерҙе. 2:1 иҫәбе менән еңеү яуланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ БР Президенты Мортаза Рәхимов эш визиты менән Австрияға барҙы. Ул Пёхларн ҡалаһында "Лассельсбергер" компаниялары төркөмөнөң төп етештереү подразделениеларының береһе булған "Цемикс" заводында булды.

✔ 15 апрелдән Октябрьский ҡалаһында "Ҡала башҡорттары: тел һәм демография проблемалары" тигән VI төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Уны БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойоштора. Форумда ҡала башҡорттарының формалашыу тарихы, республиканың көнбайыш төбәгендә тел менән бәйле хәлдәр, ҡала шарттарында башҡорт телен өйрәнеү һәм башҡа мәсьәләләр ҡараласаҡ.

✔ Сибай ҡалаһының "Гөлдәр" өлгөлө балалар бейеү ансамбле Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһында үткән "Алтын майҙан - Эльбрус" халыҡ-ара этник бейеүҙәр конкурсында ҡатнашып, беренсе урын яуланы. Шәхси беренселектә урын яулаусылар араһында ансамблдән Элина Яхина, Айнур Ишмөхәмәтов, Миләүшә Мәтинаның исемдәре лә бар.

✔ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Иң яҡшы башҡорт сайты" конкурсы үткәрә. Был сарала республиканың башҡорт телендә эшләп килгән барлыҡ сайттары ҡатнаша ала.

✔ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Башҡорттар - ергә ҡағылышлы мөнәсәбәттәрҙә" тигән темаға түңәрәк ҡор ойоштор҆о.

✔ Өфөлә Чехия һәм Башҡортостан бизнесы вәкилдәренең эшлекле осрашыуы уҙғарылды. Бизнес-осрашыуҙа өс тиҫтәнән ашыу чех фирмалары һәм 70 башҡорт компанияһы вәкилдәре ҡатнашты. Чех Республикаһының финанс министры Эдуард Янота Учалы районында эзбиз-цемент етештереү объекты буйынса проекты гәмәлгә ашырыуға булышлыҡ итергә әҙер булыуҙарын белдерҙе.

✔ З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте Каирҙа үткән 42-се Халыҡ-ара күргәҙмәлә ҡатнашты. Күргәҙмәгә килеүселәргә Пушкиндың башҡорт һәм рус телдәрендә сыҡҡан әкиәттәр китабы, башҡорт телендәге "Көнсығыш әкиәттәре", Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З. Биишеваның әҫәрҙәре һәм "Башҡорт кухняһы" төҫлә альбомы бигерәк оҡшаған.

✓ **Ышанмаһағыҙ, коттеджарҙа кемдәр йәшәгәнлеген һорашығыҙ: унда Европа ғына түгел, бар Евразия ҡитғаһы вәкилдәре килеп һыйынған. Батырыбыҙҙың музейы янына. Көслөгә һыйыналар шул.**



## ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Өфө

● Баш ҡалала машиналарҙың һаны самаһыҙ күбәйеп, хәҙер инде подъезд алдарында аяҡ баҫҡыһыҙ була башлағас, ҡала хакимдары алдына шундай дилемма килеп баҫҡан: мәсьәләне машиналарҙың һанын ҡыҫҡартып хәл итергәме, әллә ҡала майҙанын киңәйтергәме?

● Һуңғы ваҡыт Өфөлә ҡыҙ балалар ир балаларға ҡарағанда күберәк тыуа, тип һөйләйҙәр. Им-томға ышаныусылар, был хәлде илдә көтөләсәк тыныслыҡҡа, һуғыш булмауға юрай. Баш ҡаланың "Yoka press" агентлығы хәбәрсеәре иһә, ҡыҙҙарҙың күберәк тыуыуының серен интернетта киң урын алған "Ай календары" хикмәтендә күрә. Баҡтиһәң, тыуасаҡ баланың енесен календарға ҡарап, алдан уҡ билдәләп була икән. Аh, аh, беҙ ни ауылдан килгәс, русса белмәгәс...

### Әбйәлил

● Хәҙер тәүлек әйләнәһенә эшләүсе магазиндар барлыҡҡа килгәс, Асҡарҙа төндә араҡы һатыусы "Кәпәс әбей"ҙәр юҡҡа сыҡҡан. Улар хаҡында ошо районда тыуып үҫкән Әхтәм Абушахманов "Кәпәс әбей" тигән хикәйә яҙған, тип ишеттек. Киләсәктә, бәлки, "кәпәс"тәрҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында төндә һыра һатыусы берәр магазинға "Кәпәс әбей" исеме лә бирелер әле. Әйткәндәй, был исем ул "бәхетле" магазинға бирелә ҡалһа, ул үҙенең клиенттар мәсьәләһен ошо ике һүҙ менән генә тәьмин итеп, өҫтәмә табыш алыр ине.

● Күсем ауылынан Мауыҙҙы күлenә тиклем һалынған коттеджар проспектын күргәнегеҙ бармы? Күрмәһәгеҙ, барып күрегеҙ. Ғөмүмән, күлдең тирәяғын сыбарлаған ундай йорттарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Яҡындағы Ташбулат ауылында ла шул уҡ хәл. Унда күлдең ситенә йорт һалыусылар хатта унитаз һыуҙарының каналын туп-тура күл ситенә йырып уҡ ҡуйған. Былдай тәҙәләштәрҙән пәйҙә булған ҡалаға "Тере музей" тигән исем биреп, рәсмиләштереп кенә ҡуйырға кәрәктер, тип хәбәр иттеләр райондың "Yoka press" агентлығы хәбәрселәре. Ни өсөн тигәндә, Күсем ауылында халҡыбыҙҙың бөйөк улы, батыры, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимов тыуып үҫкән һәм ул Европа халыҡтарын фашистар ҡоллоғонан азат итеүҙә ҡатнашҡан. Ышанмаһағыҙ, коттеджарҙа кемдәр йәшәгәнлеген һорашығыҙ: унда Европа ғына түгел, бар Евразия ҡитғаһы вәкилдәре килеп һыйынған. Батырыбыҙҙың музейы янына. Көслөгә һыйыналар шул.

## АФАРИН!

# ҺӨНӘРЕМ - ЯҘМЫШЫМ...

## тип йәшәй уҡытыусы

**(Башы 1-се биттә).**

Жюри рәйесе, Педагогика институты директоры, педагогия фәндәре докторы, профессор Әлфис Ғаязов әйтеүенсә, конкурсҡа ижади ҡарашлы, үҙ эшен яратыусы кешеләр йыйылғайны.

-Һөнәри оҫталыҡты иң тәүҙә асыҡ дәрестәрҙә күреп була. Тап дәрес уҡытыусының педагогик эшмәкәрлеге сифатын, уның балалар менән эшләү һәләтен билдәләй ҙә инде. Инновацион проекттар тәҡдим итеү ҙә бөйгенең мөһим өлөшө булды. Асыҡ лекция менән сығыш яһап, уҡытыусы һөйләй белеү генә түгел, ә башҡаларҙы инандыра алыу оҫталығын да күрһәтте, - ти Ғаяз Әлфис улы.

Быйылғы конкурсҡа республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының да әүҙем ҡатнашыуы күҙәтелде. Илеш, Яңауыл, Асҡын, Дүртөйлө, Саҡмағош, Краснокама, Ҡалтасы райондары, Ағиҙел, Нефтекама ҡалалары менән бер рәттән, Кушнаренко, Шарандан да уҡытыусылар булды, тимәк, был төбәктәрҙә лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыу һорошо йылдан-йыл яҡшыра, тәжрибәле, һәләтле уҡытыусылар барлыҡҡа килә. Жюри ағзаларын бәйгеселәр араһында ир-егеттәрҙең күбәйә барыуы ла, өмөтлө йәш уҡытыусыларҙың булыуы ла һөйөндөргән.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын тәбрикләп, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев Башҡортостанда уҡытыусыларға ярҙам итеүгә йүнәлтелгән конкурстарҙың күп үткәрелеүен билдәләп үтте. Былдай конкурстарҙың иң мөһиме, әлбиттә, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы"конкурсы, һуңғы йылдарҙа уның сиктәрендә башҡорт, татар һәм рус телдәре уҡытыусылары араһында бәйге айырым үткәрелә.

-Төбәк-ара конкурс йыл һайын бик юғары кимәлдә үткәрелә, был республикала туған телдәрҙе өйрәнеүгә зур иғтибар бүленеүе тураһында һөйләй, - тине Илдус Ғөбәйҙулла улы. -Һуңғы йылдарҙа бәйгелә күрше төбәктәрҙә эшләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла ҡатнаша башлауы яҡшы күренеш. Киләсәктә был конкурс, бәлки, халыҡ-ара кимәлгә лә күтәрелер әле. Был мәсьәләне быйыл үтәсәк III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрергә йыйынабыҙ.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2010" конкурсының еңеүсеһе булып Стәрлетамаҡ районынан Гүзәл Сәлимйәнова танылды. Ул райондың Рощинский дөйөм белем биреү мәктәбендә эшләй.

-Мин был исемгә оҙаҡ йылдар, байтаҡ тәжрибә туплап килдем, - ти Гүзәл Фәрит ҡыҙы. - Конкурста беренсе йыл ҡатнашмайым, әммә финалистар рәтенә эләккәнем булманы. Балаларға белем биреү генә түгел, коллегаларым менән дә уртаҡлашыр тәжрибәм һәм педагогик оҫталығым барлығына ышанысым мине еңеүгә килтерҙе лә инде. Ә яҡшы уҡытыусы булыуҙың сере ябай - бының өсөн балаларҙы яратырға һәм уңышҡа өлгәшеү өсөн көн һайын бәләкәй еңеүҙәр яулап, гел алға ынтылырға. Уҡытыусы эше - минең яҙмышым, шуға ла ауырлыҡтарға ҡарамайынса, һөнәремә тоғро ҡалам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Былдай һөнәри оҫталыҡ конкурстары, һис шикһеҙ, туған тел уҡытыусыларына яңынан-яңы мөмкинлектәр аса. Бынан тыш, республикала башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусылары өсөн махсус премиялар булдырылған, конференциялар һәм башҡа саралар йыш үткәрелә. БР Мәғариф министрлығының милли мәғариф һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеге етәксеһе Рәйсә Күзбәкова әйтеүенсә, Рәсәй кимәлендә ойошторолған һөнәри бәйгеләрҙә туған тел уҡытыусыларының да күпләп ҡатнашыуы һәм еңеүле урындар яулауына ғәжәпләнергә кәрәкмәй, сөнки бөгөн улар өсөн республикала күп эштәр эшләнә. "Хәҙер иң мөһиме, уҡытыусылар үҙ баһаһын күтәреү өҫтөндә үҙҙәре эшләһен ине. Бының өсөн уларға белемле булыу ҙа, һөнәри оҫталыҡ та, тәжрибә лә кәрәк. Уҡытыусы гәзәл, юғары әхлаҡлы булһа, элекке замандағы уҡытыусылар кимәлөнә күтәрелә алыр ине", - тигән теләктәрен дә еткерҙе Рәйсә Абдрахман ҡыҙы.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



**"Киске Өфө" гәзите редакцияһы бүләкләгән уҡытыусылар.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы Советы депутаттары 2010-2012 йылдарға "Башҡортостан баш ҡалаһының педагог кадрҙары" маҡсатлы программаһын ҡабул итте. Документҡа ярашлы, өс йыл эсендә Өфө уҡытыусыларына 216 миллион һум аҡса тотоноласаҡ. Шуның 201 миллионы уҡытыусылар өсөн 140 фатирлы йорт төҙөүгә китәсәк. Ул быйыл уҡ төҙөлә башлаясаҡ. Әле баш ҡалала 500-ләп уҡытыусы торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж. Эш хаҡы уртаса 14 мең самаһы булған уҡытыусы, әлбиттә, ипотекаға фатир һатып алыу мөмкинлегенә эйә түгел. Тимәк, депутаттар бик ваҡытлы ҡарар ҡабул иткән.

✓Баш ҡалала тирә-яҡты таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса санитар айлыҡ башланды. 24 апрелдә һәм 15 майҙа дөйөм ҡала буйынса өмәләр үткәреләсәк.

✓БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт хеҙмәте идаралығы белгестәре хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлекте кәметеү буйынса программаны тормошҡа ашырыу механизмдары, унда ҡатнашыу шарттары тураһындағы һорауҙарға яуап бирҙе. Былдай бәйләнештәр артабан да дауам итәсәк, 251-51-75, 251-51-83 телефондары буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓Башҡортостанда 15 апрелдән 15 июнгә тиклем, һыулдырыҡ һалыу осоронда, балыҡ тотоу тыйыла. Павловка һыуһаҡлағысында балыҡ тотоуҙы тыйыу боҙ ватылыуҙан башлап 10 июнгә тиклем индерелә.

✓Росстаттың яңы проекты - 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға арналған викторина башланды. Ул буласаҡ мөһим кампания ваҡытында халыҡтың мәғлүмәтлелеген арттырыу маҡсатында ойошторола. Викторинала ҡатнашыусыларға иҫәп ҡағыҙҙары йөкмәткеһенә, төрлө йылдарҙа иҫәп алыу тарихына, халыҡ иҫәбен алыуҙың башҡа темаларына ҡағылышлы һорауҙар биреләсәк. Викторинала 18 йәше тулған Рәсәй граждандары ҡатнаша ала. Еңеүселәр етешәр мең һумлыҡ аҡсалата приз менән бүләкләнә. Викторина һорауҙары аҙна һайын "Рәсәй радиоһы" радио каналындағы "Иҫәп алыу хәҡиҡәттәре" программаһы эфирында биреләсәк һәм бер үк ваҡытта www.perepis2010.ru сайтындағы "Викторина" киҫәгендә баҫыласаҡ.

ИР-АЗАМАТ

**Гәзитебеҙҙең махсус бүлегенә лайыҡ булғайны Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылында йәшәүсе Ғәлийән Төхфәтуллин. Ошо көндәрҙә ул редакциябыҙҙа булды һәм үҙенең ҡайһы бер уй-фекерҙәре менән дә уртаҡлашты. Ауылда шаулатып донъя көткән, бынамын тигән улдар үҫтергән, үҙенең шәхси хужалығындағы эштәрҙе көн күрерлек, килем алырлыҡ итеп ойоштороған ағайҙың һөйләгәндәрен гәзит уҡыусыларыбыҙға ла ишеттермәксе булдыҡ.**

# ЗАМАН АУЫР БУЛҺА НИ...

## еңеләйтә белегеҙ

### Туғандар бергә йәшәһен ул

Үҙемдең бөтә ғүмеремде уҡытыусылыҡ эшенә, балаларҙы тәрбиәләүгә бағышланым. Әле хаҡлы ялда булһам да, өйҙә генә ултырып сыҙамайым: ауылдаштарҙың хәлен белешеп торам, ярҙам кәрәк булһа, йүгереп барам. Тормош иптәшем менән ике ул, бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерҙек. Ике улыбыҙ ҙа ауылда йәшәй, ғаиләләре бар, күмәкләшеп, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтерәбеҙ. Атайһыҙ үҫкәнгә күрә, тормош ҡорған саҡта минә күп ауырлыҡтар кисерергә, тормошта кәрәк булған һөнәрҙәргә лә үҙ аллы өйрәнергә тура килде. Шуға күрә улдарымды иң беренсе тормошта кәрәкле булырҙай төрлө һөнәрҙәргә өйрәтергә тырыштым.

Өлкән улым менән бергә йәшәйбеҙ, ҡыҙыбыҙ ҙа янybыҙҙа. Ҙур ғаилә булып, бергә-бергә йәшәүе шул тиклем күңелле: балалар, ейәндәр менән булышып, ваҡыттың үткәнен дә һиҙмәй ҡалабыҙ. Элек беҙҙең башҡорт ғаиләләре ишле булһа ла, өйләнгән улдары ата-әсәһе менән бергә йәшәгән, ә хәҙер иркенләп, айырым йәшәһендәр, тип, ғаилә ҡорған балаларҙы башҡа сығаралар. Мин быны ҙур хата, тип иҫәпләйем. Үҙемдең ҡартатайымдар өс ғаилә бергә торған, кулаклаштырыу башланғас ҡына, бүленеп сыҡҡандар. Ә бына Кавказ халыҡтарында әле лә уландарҙы айырып сығарыу юҡ.

Бер ғаилә булып уҡмашып йәшәүҙең әһәмиәте нимәлә? Беренсенән, был ата-әсәнең абруйын һаҡлай. Бергә йәшәгән осраҡта һәр кем ғаиләлә атай кеше баш һәм төп һүҙ уныҡы булырға тейеш икәнде белә. Шулай уҡ ата кеше лә улдары алдында үҙенең абруйын, вазифаһын онотмай. Икенсенән, бәләкәй балалар һәр ваҡыт ҡараулы була: улым менән киленем балалар өсөн борсолмай ғына эш көнөн уҙғара, олатай менән өләсәй булғанда сабыйҙарҙы балалар баҡсаһына йөрөтөргә лә кәрәкмәй. Ейәндәрем менән көнө буйы бергә булабыҙ, уларға әкиәт-риүәйәттәр һөйләйем, шиғырҙар ятлатам, йомаҡтар ҡоям. Олатай менән өләсәй тәрбиәһендә үҫкәнгәләр, ейәндәрем шул тиклем сос, зирәктәр.

### Ниңә буйҙаҡтар күбәйҙе?

Һуңғы йылдарҙа буйҙаҡлыҡ ҙур бер бәләгә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Ни өсөн бынамын тигән егеттәребеҙ кәләш алмай, бынамын тигән ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сыҡмай? Мин бында бер нисә сәбәп күрәм.

Һуғыштан һуң ауылдарҙа ыҙалап йәшәгән, ғүмер буйы колхозда бил бөккән кешеләр балаларын ауырлыҡтарҙан араларға, уларҙы ҡалаларға ебәреп уҡытырға тырышты. Тик ата-әсәһе тырышырып, ҙур өмөттәр бағлап юғары уҡыу йортона индерһә лә, күптәрҙең ғилем тауына менергә түҙемлеге етмәй, уҡыуын ташлаған осраҡтарҙы ла күрҙек. Шуға күрә, бөтә кеше лә юғары белем алырға тейеш, тигән маҡсат менән йәшәргә кәрәкмәй, ә баланы иң беренсе хеҙмәткә өйрәтергә кәрәк, хеҙмәт һөйгән кеше тормошта һәр саҡ үҙ урынын таба.

Күп осраҡта ҡыҙҙар ҡалаға китә, ә егеттәр ауылда ҡала. Ҡаланың уңайлы шарттарына өйрәнгән ҡыҙҙар ауыл егеттәренән кәрәгенән күпте талап итә башлай, ә ауылда ҡалған егет был талаптарҙы үтәй алмаҫмын, тип ҡурҡа һәм үҙе үк ҡыҙҙарҙан ҡасыуҙы хуп күрә. Һөҙөмтәлә, беҙҙең егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ ике ярҙа тороп ҡала. Бына шулай башлана ла инде буйҙаҡлыҡ мәсьәләләре.

Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа күп йәштәр ауылда эш юҡлығына, мөмкинлектәр әҙ булыуына һылтанып, ҡалаға ынтыла. Тормошҡа зарланып, ситтән бәхет эҙләүҙең кәрәге бар микән? Бәлки, беҙгә шул мөмкинлектәрҙе үҙебеҙгә булдырырға? Эйе, ысынлап та, тәбиғәт биргән бөтә нәмәне ҡулланырға, файҙа алырға мөмкин, тик ысулдарын ғына өйрән, үҙләштер. Ә беҙгә ул ысулдарҙы әллә ҡайҙан эҙләргә лә кәрәкмәй, сөнки ата-бабаларыбыҙ әллә күпме һөнәрҙәрҙе аманат итеп ҡалдырған. Шул уҡ умарта тотоу, шул уҡ мал ҡарау, ер эшкәртеү ҙә беҙгә ата-бабаларҙан ҡалған һөнәрҙәр.

Ауылыбыҙҙа үҙ көсө менән мал үрсетеп, йәшелсә үҫтереп йәшәүсе тырыш ғаиләләр бар. Беҙ ҙә ғаиләбеҙ менән йәшелсә үҫтерәбеҙ: үҙенә ашарға ла етә, өҫтәмә килем дә килтерә. Етештергән йәшелсә, емеш-еләкте баш ҡала баҙарына алып килеп һатабыҙ, аҡса эшләйбеҙ.

### Бала үҙ ауылында белем алырға тейеш

Ауылыбыҙҙа нисә йылдар буйы гөрләп эшләп килгән, күпме "карлуғастар" осорған, күпме кешегә аң-белем биргән, тормошҡа юл күрһәткән туғыҙ йыллыҡ мәктәптең ябылыуы афәт булып ябырылды: ауыл халҡының күп өлөшө эшһеҙ ҡалды, балаларыбыҙ сит мөхиткә китергә мәжбүр булды. Нимә генә тимәһендәр, бала башланғыс мәктәпте бөткәнсе ата-әсәһе янында булырға, үҙ ауылында белем алырға тейеш. Бәләкәй генә ауылды ла мәктәпһеҙ ҡалдырырға ярамай, сөнки ауыл мәктәбе иҫ белгәндән башлап изге бер урын булып баланың күңелендә уйылып ҡала. Мәктәп улар өсөн мөғжизәле бер донъяға әүерелә, уны улар үҙҙәренең фантазияһы менән тағы ла нығыраҡ байыта. Ә ауыл мәктәпһеҙ булһа, бала күңеле мәктәпкә ҡарата булған ана шул изге тойғоларҙан мәхрүм ҡаласаҡ.

Унан һуң, мәктәп үҙ ауылында булған саҡта ғаиләләге балалар мәктәпкә бергә бара, бергә ҡайта, мәктәптә саҡта ла бер-береһен күреп йөрөй, унда уҙғарылған һәр сарага үҙенең кесе туғанын, шулай уҡ ата-әсәһен, өләсәй-олатаһын алып килә һәм был сара дөйөм ғаилә байрамына әүерелә. Бына ниндәй ҙур тәрбиәүи саранан мәхрүм ителде беҙҙең ауыл балалары.

Ниндәй ауыр һуғыш ваҡытында ла халыҡ мәктәп ябылмаһын өсөн тырышты. Ул замандарҙа бигерәк тә яғыулыҡҡа ҡытлыҡ була торғайны бит. Ата-әсәләр өйҙәрендә һыуыҡ булһа ла, мәктәпте йылы тоторға тырышыр ине. Шул замандарҙы иҫкә төшөрөп, олатай-өләсәйҙәребеҙҙән ни тиклем аҡыллы булғанына тағы бер тапҡыр һоҡланаһың. Ә хәҙерге быуын ата-әсәләр еңел генә күнде лә ҡуйҙы мәктәп ябылыуына.

Эйе, шундай закон төшөрөлдө шул юғарынан: оптималләштереү, йәнәһе. Хәҙер мәғариф өлкәһендә ниндәй генә закондар сығарылмай. Үкенескә күрә, уларҙың күбеһе файҙаһыҙ һәм уйлап еткерелмәгән. Хәҙер уйлап еткереүҙәрен, емерелгәнде яңынан төҙөй башлауҙарын көтәбеҙ инде. Рәсәй гәҙәттәре шундай шул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙең киләсәге ауылда, тип йомғаҡлаңы һүҙен аҡһаҡалдар йәшенә еткән Ғәлийән Төхфәтуллин. Ысынлап та, йәйрәп ятҡан еребеҙҙең, ҡалын-ҡалын урмандарыбыҙҙың, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙың ҡәҙерен белеп етмәйбеҙ, дөрөҫ файҙаланмайбыҙ, етмәһә, уларҙы вайымһыҙ ғына сит-яттар ҡулына тапшырабыҙ. Уйланырға урын бар түгелме?**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА
яҙып алды.

ҺОРАУ - ЯУАП

## НИГЕҘЛӘМӘ МОТЛАҠ ТҮГЕЛ

**Урта профессиональ белем биреү системаһында 20 йылдан ашыу эшләп, әле бына күптән түгел штат ҡыҫҡартыуына эләктем. Тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары булып эшләй инем. Пенсияға тиклем әле 4 йыл бар. Уҡыу йылы уртаһында, шулай итеп, мин эшһеҙ ҡалдым. Уҡыусылар һаны ла, белем биреү хеҙмәттәре күләме лә кәмемәне, ә финанслау хатта артты, ошондай шарттарҙа бындай ҡарарға нигеҙләмә булырға тейеш инеме?**

Штат ҡыҫҡартыу менән бәйле һеҙҙе телән ҡасан эштән бушата алалар ине. Әйткәндәй, администрация башланғысы менән урта махсус уҡыу йорттары педагогтарын штат ҡыҫҡартыу менән бәйле фәҡәт уҡыу йылы тамамланғас ҡына эштән сығара алалар. Махсус урта уҡыу йорто хеҙмәткәрҙәре иҫәбенә педагогтар, уҡытыу-ярҙамсы һәм хеҙмәтләндереүсе персонал инә. Һеҙҙең вазифа иһә был категорияға ҡарамай, ул етәксе вазифа иҫәпләнә, тимәк, юғарыла әйтеп кителгән гарантия һеҙгә ҡағылмай.

Дөйөм ҡағиҙәләргә килгәндә, эш биреүсенең ҡыҫҡартыу кәрәклеген нигеҙләүе мотлаҡ түгел. Ә инде һеҙҙең вазифаға икенсе берәү эшкә алынһа, был, әлбиттә, законды боҙоу булып торасаҡ. Тағы ла: эш биреүсе ҡыҫҡартыу тураһында һеҙҙе ике ай элек иҫкәртергә тейеш ине.

## ПРОКУРОР ТОТОНҺА...

**Унынсы йыл инде баламдың атаһы алимент түләмәй. Суд ҡарарын үтәмәгәне өсөн ике тапҡыр енәйәт яуаплылығына ла тарттырылды. Суд приставтары, уның милкендә бер ни ҙә юҡ, ә эшкә урынлашырға теләмәй, тип яуап бирәләр. Республиканың баш суд приставына ла яҙып ҡараным - хатымды район ҡарамағына ебәреү менән сикләнәләр. Миңә ни эшләргә?**

- Дөрөҫ, суд ҡарарын үтәмәгәне өсөн гражданин административ йәки енәйәт яуаплылығына тарттырыла. РФ Енәйәт кодексының 157-се статьяһына ярашлы, "Балаларҙы йәки эшкә яраҡһыҙ ата-әсәһен аҫырауға аҡса түләүҙән уҫал ниәт менән баш тартҡаны" өсөн бурыслы кеше суд ҡарары буйынса 120-180 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәргә йәки бер йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәренә йәлеп ителә, йә булмаһа өс айға тиклем ҡулға алына. Хатығыҙҙа яҙыуығыҙса, элекке ирегеҙ алимент түләмәгәне өсөн ике тапҡыр енәйәт яуаплылығына тарттырылған булыуға ҡарамаҫтан, тағы ла шундай уҡ юллау хаты яҙып ебәрегеҙ. Суд ҡарары башҡарыла торған урын буйынса прокурорға мөрәжәғәт итегеҙ.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



### Һалҡын тейҙереп, йүткерә башлаһағыҙ...

❖ Бер стакан йылы һөткә ярты балғалаҡ аҡ май иретеп ҡушырға, балғалаҡтың өҫтөн бер өлөшө итеп кенә аш содаһы ҡушып болғатырға ла, өс көн буйы төнгөләккә эсергә. Өс көндән һуң бер балғалаҡ бал ҡушып ебәрергә.

❖ шалҡанды йыуып, ҡойроғон ҡырҡып ташларға ла, шул урында диаметры 1 см, тәрәнлеге 2-3 см самаһы соҡор эшләргә һәм бал ҡойоп, бер тәүлек торорға. Яһалған һутты иртәнсәк ас ҡарынға бер ҡалаҡ эсергә. Бал урынына шәкәр ҡомо ла ярай.

❖ һөт менән "Боржоми"ҙы бер тигеҙ күләмдә ҡушып, йылытып, 1-әр ҡалаҡлап 15-20 минут һайын көн оҙонона эсергә.

❖ эҫе быу менән тын алыу: бер нисә картуфты бешереп, һыуын түккәс, ҙур шәл йәки одеал менән ҡапланып, 5-7 минут буйы йылы быу менән тын алырға. Бешмәҫ өсөн һаҡ булығыҙ.

❖ 20 грамм андыҙ тамырын ярты литр ҡайнар һыу менән бешереп, бик эҫе булмаған мейестә 1 сәғәт йә ҡайнап ултырған һыуҙа 20 минут тотоп, һөҙөп алғас, йылы көйө яртышар стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсергә. 10-15 көндән һуң йүтәл бөтә.

❖ 2 ҡалаҡ үгәй инә үләне менән алтейҙы ҡәһүә онтағыста ваҡлағас, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ныҡлап ябырға ла, ҡайнар һыу тултырылған кәстрүлгә 20 минутҡа ҡуйып торорға. Аҙаҡтан бер нисә ҡат марля аша үткәргәс, көнөнә бер нисә тапҡыр йылы көйө икешәр ҡалаҡ эсергә.

**Әгәр ҙә йүтәл оҙаҡ (бер нисә аҙна) бөтмәй йәки, киреһенсә, көсәйеп китһә, мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә.**

### Тәмәке тартыуҙы ташларға теләүселәргә кәңәш

❖ 1 ҡалаҡ әремгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 секунд ҡайнатып, бүлмә температураһында 2 сәғәт төнәткәс, ашар алдынан 15 минут алда көнөнә өс тапҡыр бер ай дауамында эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ эвкалипт япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәткәс, 1-әр ҡалаҡ глицерин менән бал ҡушып болғатып, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә көнөнә ете тапҡыр эсергә. Бер ай самаһы эсһәгеҙ, был насар ғәҙәтегеҙҙән ҡотола алаһығыҙ.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

*✓ Башҡорттар еренә сит кешеләрҙе күсереп ултырталар. Бөтөнләй башҡаса булған ғөрөф-ғәҙәтле яңы кешеләр менән аралашыу башҡорттар араһында донъя көтөүҙең яңы төрҙәре, яңы ғәҙәттәр барлыҡҡа килә.*

*ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ*

# ТАЛХА РӘСҮЛЕВ



**Талха Ғайса улы Рәсүлев - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе. Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы) Әүәз ауылында тыуған булһа кәрәк. Атаһы Ғайса Фәтҡулла улы Рәсүлев мәшһүр "Илсе Ғайса" йырының авторы. Ахун дәрәжәһен ала. 1904-1905 йылдарҙағы Рус-япон һуғышында ҡатнаша. 3-сө Маньчжурия армияһы штабында мулла булып хеҙмәт итә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 3-сө дәрәжә Изге Станислав ордены менән бүләкләнә.**

Талха Рәсүлев ике туған ағаһы - башҡорттоң арҙаҡлы ишаны Зәйнулла Рәсүлевтың Троицкиҙағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә белем ала. Беренсе донъя һуғышына алынып, фронтта йөрөп ҡайта. 1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Талха Рәсүлевтың исеме Зәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр"ендә йыш телгә алына.

1918 йылдың апрелендә Ырымбур төрмәһенән, большевиктар ҡулынан ҡотолғас, З. Вәлиди Тамъян-Ҡатай кантонына килә. Бында уны Талха Рәсүлев оҙатып йөрөй. "Ҡайнағам буласаҡ Талха Рәсүлев менән Силәбе һәм Ялан (хәҙерге Ҡурған башҡорттары - А.Я.) аша Кустанай ҡалаһына барыу өсөн уның олоҫо Туңғатарға киттек. Түләк ауылында алтын йыуыу руднигы хужаһы Ғәҙелшаһ исемле бер менәүәр затҡа һуғылдыҡ... Түләк һәм Талханың ауылы Туңғатарҙа бер-ике көн торҙоҡ... Яҡшы аттар килтереп, ауылының көнбайышында, алыҫтағы Уйташ тауҙарындағы йәйләүҙәренә киттек. Көн йылынған, ат ярыштырып барып еттек. Көн, ысынлап та, ҡапыл йылынды. Иртә яҙ булыуға ҡарамаҫтан, ауыл янындағы бәләкәй күлдә Талха, уның ҡустылары менән бер нисә тапҡыр һыу индек. Үндан да, һулдан да ҡыҙыл урыҫ ҡарауылдарының йөрөүе хаҡында ишетәбеҙ, әммә милләтебеҙ берҙәм һәм тоғро булғанлыҡтан, үҙебеҙҙе тамам хәүефһеҙ хис иттек һәм һис бер ниндәй ҡурҡыныс булмаған кеүек иркле тойоп, ат ярыштырып бара бирҙек. Бер көндән һуң, Талха менән хушлашып, Ялан кантонына Муса Кәлимулла Хәҙис улының йортона табан юлға сыҡтым", - тип яҙа Вәлиди хәтирәләрендә.

Был осорҙа Талха Рәсүлев Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ныҡлы терәгенә әүерелә. Вәлиди Т. Рәсүлевты яуаплы бурыс менән Алыҫ Көнсығышҡа ебәрмәксе була. "Талхаға ҡағыҙҙарҙы, алтын һәм ҡағыҙ аҡсаларҙы биреп, шул уҡ көндәме, иртәгеһенәме, Чумляк станцияһына оҙаттыҡ. Әгәр Владивостоктағы Япония консуллығында һөйләшеү һөҙөмтә бирмәһә, Японияға сығып, уларҙың булышлығында Көнсығыш Рәсәй мосолмандарының фажиғәле хәлен донъяға белдереү бурысын йөкмәттек", - тип яҙа Зәки Вәлиди.

Талха Рәсүлев Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусының большевиктарға ҡаршы баш күтәргәнен ишетеп, кире әйләнеп ҡайта. "Партизан отрядтарыбыҙға таянып, милли ғәскәр ҡорһаҡ, большевиктарҙы мәмләкәтебеҙҙән ҡыуып сығарырға мөмкин буласаҡ, тигән фекергә килдек. Ошо фекергә инанғанлыҡтан, был көн беҙҙең өсөн шатлыҡлы булды, кисен байрам иттек. Тағандарҙың (был мәлдә Ғәлимйән Тағандың тыуған ауылы Тәңреғолда була улар - А.Я.) бер маһир ҡурайсыһы бар икән, шуны саҡырҙылар. Ҡымыҙ ҙа, әсе бал да бар ине. Башҡорт бейеүҙәренә маһир Талха, Муса Кәлим, Ғәлимйән Таған бер-бер артлы төшөп бейенеләр. Мин дә уларҙан ҡалышманым. Иртәгеһенә Силәбегә киттем", - ти Вәлиди.

1918 йылдың июнь башында Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Башҡорт эшмәкәрҙәре чехословактар ярҙамында башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона. Оҙаҡламай Башҡорт армияһын ойоштороу буйынса идара органы - Башҡорт хәрби шураһы булдырыла. Талха Рәсүлев хәрби шура ағзаһы итеп һайлана. 1918 йылдың июнь-июль айҙарында ул Башҡорт хәрби шураһы рәйесе Вәлидиҙең махсус йомоштарын үтәүсе вазифаһын башҡара. Июль аҙағында тыуған яғына ҡайтып, Тамъян-Ҡатай кантонының эшен яйға һалыу менән мәшғүл була. Тәүәккәл ирҙаман Т. Рәсүлевты Тамъян-Ҡатай кантоны етәксеһе - идара рәйесе итеп һайлайҙар. Кантондың етәкселек органы Верхнеуральск ҡалаһында урынлаша. 1918 йылдың 5 октябрендә Ырымбурға Башҡорт хөкүмәтенә ебәргән донесениеһында Т. Рәсүлев былай тип хәбәр итә: "...кантональная управа имеет честь донести:

1. Кантональная управа после изгнания большевиков приступила к отправлению своих функций на выборных началах с 1 августа сего года в составе следующих лиц: председателя Талхи Расулева (он же начальник кантона) - гражданина дер. Авязовой Тунгатаровской волости и членов: Мусы Шамситдинова, Хайбуллы Казаккулова - деревни Казаккуловой Кубеляк-Телевской волости и Исмагила Султанова - дер. Кутуевой той же волости.

2. Организованы при управе следующие отделы:

а) народного образования - заведующий Усман Ниязгулов;

б) медицинский - заведующий врач Кусямышев;

в) милиции - начальник отдела Мужагитдин Габдулмаликович Маликов;

г) распорядительный;

д) бухгалтерский и оценочно-окладный;

ж) статистический.

По мере надобности будут организованы и последующие отделы".

1918 йылдың октябрендә Тамъян-Ҡатай кантонының идараһы Ҡаҙаҡкол ауылына күсә. Ноябрь айында власҡа Колчак килеү менән аҡтар менән Башҡорт хөкүмәтенең мөнәсәбәттәре ҡырҡыулаша. Колчак Башҡорт хөкүмәтен, кантондарҙағы ғәскәри начальниктарҙы бөтөрөргә, башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура Дутовҡа буйһондороға тигән фарман бирә. Башҡорт етәкселеге Колчактың бойороғон үтәргә ашыҡмай. Аҡтарҙан өмөтөн өҙгән милли хәрәкәт лидерҙары Советтар менән һөйләшеүҙәр башлай. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. Талха Рәсүлев ошо һынылышлы осорҙа Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш менән бәйле тарихи ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнай.

1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында 1-се Бөтөн Башҡорт хәрби съезы үтә. Съезд барышында Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте - Башревком ойошторола. Элекке Башҡорт хөкүмәте үҙенең бөтөн вәкәләттәрен яңы идара органына тапшыра. Талха Рәсүлев милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре М. Халиҡов, Я. Салихов, Н. Таһиров, Ғ. Айытбаев һәм Ғ. Мөхәмәтйәровтар менән бергә Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана.

Оҙаҡламай Талха Рәсүлевҡа тағы ла яуаплыраҡ бурыс йөкмәтелә. Ул Мәскәүгә киткән Абдулла Әҙеһәмовтың урынына Башҡорт Совет Республикаһының аҙыҡ-түлек буйынса халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Башҡортостан автономияһы өсөн үтә лә ауыр осорҙа, 1919 йылдың февраль-март айҙарында, Т. Рәсүлев аҙыҡ-түлек мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Тиҙҙән Колчак армияһы ҡыҙылдарҙы Башҡортостандан ҡыҫырыҡлай башлай. Темәстә урынлашҡан Башревком тәүҙә Мораҡҡа, Иманғолға күсенергә, артабан Саранск ҡалаһына эвакуацияланырға мәжбүр була.

1919 йылдың авгусында Башревком Башҡортостанға ҡайта. Республиканың урындағы власть органдары эшмәкәрлеге яңынан тергеҙелә башлай. Талха Рәсүлев, тыуған яғына ҡайтып, Тамьян-Ҡатай кантонында эшләй. 1920 йылдың май аҙағында Башсовнархоз Президиумы ағзаһы итеп һайлана. Әммә бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 16 июндә Башревком ағзалары, Үҙәк Совет власының мәкерле милли сәйәсәтенә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эштән китә. Зәки Вәлидиҙең кәңәше буйынса башҡорт эшмәкәрҙәре Төркөстанға юллана. "Хәтирәләр"ҙән күренеүенсә, Талха Рәсүлев Төркөстанда Зәки Вәлиди янында йөрөй. Әммә уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Рәүеф Насиров яҙыуынса, Талха Рәсүлев Төркөстандағы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Алыҫ Көнсығышҡа киткән, аҙаҡ Ҡытайға сыҡҡан.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*АТА-БАБА АҠЫЛЫ*

**Мөхәмәтсәлим ӨМӨТБАЕВ**



# ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

● Башҡорттарҙың бөлгөнлөккә төшөүе күсмә тормоштан ултыраҡҡа ҡапыл күсеү менән дә бәйле. Хәҙергә улар ни яңы һөнәргә күнегеп китә алмайҙар, ни Европа кешеләренең эштәрен өйрәнеп өлгөрмәгәндәр. Улар тик күсмә халыҡтарҙың һөнәрен генә беләләр. Мәҫәлән, һыбай йөрөү өсөн кәрәк нәмәләр һәм башҡа төрлө күсмә тормош кәрәк-яраҡтары яһайҙар. Күсмәлекте ташлау менән уларын да, мәҫәлән, кейем-һалым тегеү, тире иләү, йөн буяҡлау, ебәк менән сигеү кеүек нәмәләрҙе лә онотоп баралар. Элекке һөнәрҙәрен ҡалдырып, яңыларына бик аҡрын тотоналар. Шуның арҡаһында бөтә нәмәне һатып алыу ғәҙәткә кереп киткән.

● Башҡорт халҡы фәнгә һәм һөнәргә бик һәләтле. Мәҫәлән, Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадет корпусының Азия эскадронында (бүлегендә - Ғ.Ҡ.) уҡыусы мишәрҙәр, типтәрҙәр, ҡырғыҙҙар һәм рустар араһында һәр саҡ башҡорт егеттәре айырылып торған. Башҡорттар тәкәббер холоҡло түгелдәр, ялағайланырға, ярамһаҡланырға ла яратмайҙар. Уларҙа юҡ-барға ышаныу ғәҙәте ҡалмаған тиерлек, сихырлау кеүек ғәләмәттәр бөтөнләй юҡ. Тау-урман башҡорттарының йәнлек тиреһе менән яһаҡ түләгәнлектән, һунарға йөрөү, йәнлек аулау, балыҡ тотоу, ҡорт аҫрау төп кәсептәре булып тора. Ә ялан башҡорттарының төп эше мал аҫрау булып, игенде ашлыҡ өсөн генә сәскәндәр. Улар ситса күлдәк түгел, етендән, ә ярлыраҡтары кесерткәндән һәм тарманан һуғылған күлдәк кейгәндәр. Суйын көршәктән башҡаларын үҙҙәре яһаған. Хәҙер, ерҙәрҙе һатҡас, һоҡланғыс урмандарҙы ҡырғас, һунарсылыҡ элекке килемде бирмәй, ерҙәрҙе күпләп һөрөү арҡаһында малдар күпләп кәмей. Башҡорттар еренә сит кешеләрҙе күсереп ултырталар. Бөтөнләй башҡаса булған ғөрөф-ғәҙәтле яңы кешеләр менән аралашыу башҡорттар араһында донъя көтөүҙең яңы төрҙәре, яңы ғәҙәттәр барлыҡҡа килеүенә килтерә. Был үҙгәрештәрҙән шул уҡ түрәләр файҙалана. Улар ерҙе арендалаусыларға һәм һатып алыусыларға төрлөсә булышлыҡ итәләр. Кешеләр йөрәктәренән һыҡранһалар ҙа ҡаршылыҡ күрһәтерлек мөмкинлек юҡ. Сөнки кантон башлығынан алып иң һуңғы казакка тиклем ялыу йөрөтөүсене, судһыҙ-ниһеҙ, розга менән туҡмай. Дөрөҫ, кантон начальнигына закон буйынса 5 ҡамсы рөхсәт ителә, тик күп осраҡта ул быны 10 һәм унан күберәккә арттырып ебәрә.

Башҡортостанда хәрби тәртиптәр бөтөрөлөп, башҡорттар өҫтөнән опека алынғандан һуң урман һәм сабынлыҡтарҙы ҡоротоусы төркөмдәр барлыҡҡа килде. Улар, башҡорттарҙы ер-һыуҙы ҡарай алмауҙа, ялҡаулыҡта ғәйепләп, ер-һыу, урманды ситкә һаталар. Ләкин был күҙ буяу ғына. Ялҡаулыҡ башҡорттарҙың тыумыштан килгән сифаты түгел. Мәҫәлән, баҫыу эшендә улар етеҙлеге, таҫыллығы, түҙемлеге буйынса күсеп килгән халыҡтан айырылып тора. Ҡатын-ҡыҙҙар бесән саба, ураҡ ура, күбә һәм кәбән һала. Уларҙың ҡайһы берҙәре ирҙәр менән бер тиң эш хаҡы ала. Ә наҙанлыҡтары, рус телен һәм Европа культураһын аҙ белеүҙәре өсөн башҡорттар үҙҙәре ғәйепле түгел. Йәштәрҙе уҡытыу иң кәрәкле фәндәрҙе һәм эштәрҙе белергә булышлыҡ итер ине. Ләкин, ни өсөндөр, беҙҙә рус мәктәптәре асыуҙа бары миссионерлыҡ маҡсаттарын ғына күрәләр. Шулай ҙа грамоталы, йәғни рус грамотаһы белеүсе кешеләр, өйҙә булһа ла балаларын русса уҡыу-яҙырға өйрәтәләр. Әлбиттә, бындай шарттарҙа уҡыған малайҙар һәм ҡыҙҙар саҡ-саҡ ҡына хәреф танырға, арлы-бирле һыҙғыларға өйрәнеүҙән ары китә алмай. Ғәҙәттә, сирҙең үҙен белмәй тороп, рецепт яҙып бармайҙар. Башҡортостанда русса уҡытыуҙың насар булыуы мосолман дин әһелдәренең саяланып ҡаршылашыуы арҡаһында ғына түгел, миссионерлыҡ хәрәкәтенә лә бәйле.

**(Дауамы. Башы 13-14-се һандарҙа).**

***✓ Йәмәғәт эшендә халыҡты борсоған проблемаларҙы күтәреп сығып ҡына уңыш ҡаҙанып булмай, уларҙы хәл итеү, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы ғәмәлгә ашырыу юлдарын табыу мөһимерәк.***

**Республика йылы исеме менән нарыҡланған 2010 йыл үҙенең сағыу ижтимағи-сәйәси ваҡиғалары менән иҫтә ҡаласаҡ. III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын уларҙың иң әһәмиәтлеләренең береһе, тип әйтергә була. Оло форумға әҙерлек барғанда һуңғы ике тиҫтә йылда милләтебеҙҙең рухи хәлендә булған үҙгәрештәр, ил-йортобоҙ үҫешендәге ҡаҙаныштар, йәшәйешебеҙҙең бөгөнгө осорона хас булған хәүефле проблемалар тураһында уйланмайынса булмай. Гәзитебеҙ редакцияһының әңгәмә өҫтәле артында ошо хаҡта фекер алышыу маҡсатында ҡоролтай эшмәкәрлегендә бик әүҙем ҡатнашҡан арҙаҡлы зыялыларыбыҙ, Башҡортостан фәндәр академияһының мөхбир ағзалары, тарих фәндәре докторы Нияз МӘЖИТОВ, философия фәндәре докторы Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН һәм БР Фәндәр академияһының Социаль һәм сәйәси тикшеренеүҙәр институты директоры, социология фәндәре кандидаты Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ осрашты.**

**▶ Милләтебеҙҙең төп ижтимағи ойошмаһының барлыҡҡа килеүенә 15 йыл тулыу айҡанлы ошо тарихи ваҡиғаның башҡорт донъяһына булған йоғонтоһо, сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ шарттарында республикабыҙ дәүләтселеген һаҡлап ҡалыу, халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереү өсөн ни тиклем әһәмиәтле булыуы хаҡында иҫкә алыу кәрәктер…**

**Нияз МӘЖИТОВ:** Беренсе ҡоролтай башҡорт халҡының яҙмышында, хәҙерге йәшәйешендә килеп тыуған бик күп сәйәси, рухи-мәҙәни проблемаларҙы кисекмәҫтән хәл итеү зарурлығы арҡаһында ойошторолдо. Тап шуның өсөн Беренсе ҡоролтай үҙенең ҡарарҙарында ойошмабыҙҙың Башҡарма комитетына башҡорт телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү, халҡыбыҙҙың йәшәү хәлен, көнкүрешен яҡшыртыу өсөн заманса шарттар булдырыу бурысын йөкмәтте.

Ҡоролтай тамамланды, ә Башҡарма комитетҡа иҫ китмәле ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итә алыу юлдарын табыу бик мөһим ине. Ул саҡта йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлеген алып барыу өсөн әллә ниндәй шарттар ҙа булманы, тәжрибә лә аҙ ине. Шулай ҙа йыш йыйылышып, кәңәшләшеп эшләгәс, иң көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итеү ысулдарын төҫмөрләй башланыҡ. Беҙҙе бигерәк тә төп башҡорт райондарының, ауылдарының социаль хәле, унда йәшәгән халыҡтың ауыр көнкүреше, мәктәптәрҙең иҫкергән булыуы, мәҙәниәт үҙәктәренең емерек хәлдә йәиһә бөтөнләй булмауы ныҡ борсой ине. Башҡортостандың дөйөм ҡаҙнаға индергән өлөшө тос булыуына ҡарамаҫтан, ауыл мөхитендә йәшәгән халыҡ тиҫтәләгән йылдар буйы үгәйһетелеп килде: юлдар юҡ, газ индереү, яңы мәғариф һәм мәҙәниәт объекттарын төҙөү ҙә юҡҡа иҫәп. Беҙ үҙебеҙҙең ойошмабыҙ аша ошо ғәҙелһеҙлекте төҙәтеүҙе талап итә башланыҡ, дәүләт власы органдарына ла үҙ ҡарашыбыҙҙы асыҡтан-асыҡ еткерә алдыҡ.

Ул саҡта Башҡарма комитетты ныҡ борсоған тағы бер проблема булды. Белеүегеҙсә, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса республикабыҙҙа башҡорттарҙың 70 меңдән ашыуға кәмеүе билдәле булды. Бының ысынбарлыҡҡа тап килеүе мөмкин булмаған хәл ине, һәм был мәсьәлә буйынса ҡабул ителгән ҡоролтай ҡарарына нигеҙләнеп, ошо хәлгә асыҡлыҡ индереү өсөн махсус тикшеренеүҙәр башлап ебәрҙек. Райондарҙағы, ауылдарҙағы хәлдәрҙе өйрәнеү маҡсатында урындарҙа халыҡ менән осрашыуҙар йыш ойоштоборолдо, бер үк ваҡытта һәр төбәктә йыйындар уҙғарылып, район ҡоролтайҙары булдырылды. Тап ошо ойоштороу эштәрендә, халыҡ менән аралашыу аша беҙ әлегәсә хәл ителмәгән мәсьәләләр буйынса дөрөҫ ҡарашҡа килә алдыҡ. Шул уҡ халыҡ иҫәбен алыуҙа ебәрелгән хаталарҙың сәбәптәрен төрлө ауылдарҙан алынған мәғлүмәттәр аша асыҡлау мөмкин булды. Әйтергә кәрәк, Башҡарма комитет исеменә ошо мәсьәлә буйынса бик күп хаттар килә ине, һәм уларҙа бик эшлекле һәм кәрәкле мәғлүмәттәр, тәҡдимдәр күп булды. 1995 йылдың октябрендә Башҡарма комитет халыҡ иҫәбен алыу мәсьәләләрен өйрәнеү буйынса эшсе төркөм булдырҙы, уның эшенә Таһир Ишкинин, Дамир Күскилдин кеүек әүҙем йәмәғәтселәребеҙ, тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров һәм башҡа ғалимдарыбыҙ йәлеп ителде. Әйтергә кәрәк, был эшебеҙ ете йыл дауамында алып барылып, бик һәйбәт һөҙөмтә бирҙе. Был күптәрҙә халҡыбыҙ тарихын ентекләберәк өйрәнеү, үҙ нәҫел-нәсәбенең, ауылының, ырыуының үткәненә ҡыҙыҡһыныу уята алыу йәһәтенән дә бик фәһемле. Башта 1979 һәм 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарын өйрәнеү төп маҡсат булһа, артабан 1917 йылдан һуңғы документтар ҙа ентекләп тикшерелде, һуңынан XVIII-XIX быуаттарҙан ҡалған сығанаҡтар өйрәнелде. Һөҙөмтәлә асыҡлана барған мәғлүмәттәр бар йәмәғәтселеккә еткерелә барып, ошо проблема буйынса бик мөһим һығымталары булған ғилми хеҙмәттәр баҫылып сыҡты. Беҙ бөгөн быны халҡыбыҙҙың объектив тарихын тергеҙеүгә индерелгән ҙур өлөш, тип баһалай алабыҙ.

Ҡоролтай Башҡарма комитетында күтәрелгән мәсьәләләр, ҡабул ителгән ҡарарҙар буйынса беҙ туранан-тура Президентҡа, Хөкүмәткә мөрәжәғәт итә алдыҡ, республика етәкселеге лә бер ҡасан да беҙҙең эшебеҙгә һәм һорау-тәҡдимдәребеҙгә битараф булманы. Минең, Башҡарма комитет рәйесе буларак, Президент хакимиәте етәкселәренә лә инеп йөрөп, уларҙан һәр ваҡытта тейешле ярҙам һәм хуплау алыу мөмкинлегем булды.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Бынан 15 йыл элек бөтөн донъя буйлап һибелеп йәшәгән башҡорт халҡы вәкилдәрен бер ҡорға йыйып алыу яңы тарихыбыҙҙың иң күренекле ваҡиғаларынан булып, уның өр-яңы битен башлап ебәргәндер, тиһәк, яңылыш булмаҫ. Рәсәйҙең сәйәси ҡоролошо үҙгәреп, ижтимағи тормоштоң ҡайнап торған бер мәлендә республиканың суверенлы дәүләтселеген һаҡлау, милләтебеҙҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын яҡлау кеүек мәсьәләләрҙе дөйөм халыҡ ихтыярын белдереү кимәленә сығара алмаһаҡ, федерализм принциптарының тамам юҡҡа сығарылып, яңынан унитаристар баҫымы һәм ҡыҫымы аҫтында йәшәүгә дусар ителер инек. Милләтебеҙҙең үҙаңын, уның дәүләтселеген сағылдырған идеяларҙың I башҡорт ҡоролтайы трибунаһынан тағы ла бер тапҡыр иғлан ителеүе тап шуның өсөн тарихи әһәмиәткә эйә.

Ошо тәүге оло башҡорт ҡоронда ил-йорт яҙмышын хәл итерлек глобаль мәсьәләләр ҡаралды. Сәйәси-ижтимағи үҙгәрештәр заманына ярашлы халҡыбыҙ алдында торған проблемалар, башҡа халыҡтар араһындағы үҙ урыныбыҙ, хосусилаштырыу сәйәсәтендә ижтимағи һәм иҡтисади позициябыҙ, халҡыбыҙҙың үҫешен тәьмин итерлек милли кадрҙар әҙерләү кеүек мөһим өлкәләрҙе сағылдырған сығыштар, фекер алышыуҙар, ҡабул ителгән ҡарарҙар яҡын киләсәктәге аҙымдарыбыҙҙы аныҡ билдәләү мөмкинлеген бирҙе. Әйтергә кәрәк, II ҡоролтайға тиклемге 7 йыл дауамында хаҡыбыҙҙы борсоған күп кенә мәсьәләләр ыңғай хәл ителеүенә ҡарамаҫтан, төп бурыстарыбыҙ тулыһынса үтәлде, тип һығымта яһау иртәрәк ине. Шуның өсөн II ҡоролтайҙа башланған эштәребеҙгә йомғаҡ яһалып, яңы шарттарҙа килеп тыуған бурыстар аныҡланды, яңы маҡсаттар билдәләнде. Минеңсә, халҡыбыҙҙың тарихи үҙаңын тергеҙеү, уның милли үҙбилдәләнешкә хоҡуғының тейелгеһеҙ булыуын аңлатыу, ошо нигеҙҙә милләтте уның үтәлешен федераль властарҙан талап итә алыу кимәленә еткереү ҡоролтай эшмәкәрлегенең төп һөҙөмтәһе булып тора.

> **Нияз МӘЖИТОВ:**
>
> ***Мәғариф учреждениеларын йән башына финанслауға күсеүгә һылтанып, аҙ комплектлы мәктәптәрҙе ябыу дәүләт сәйәсәтенә әйләндерелде. Был башҡорт халҡының милли мәнфәғәттәренә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтереүсе сәйәсәткә тиң, сөнки халҡыбыҙҙың байтаҡ өлөшө бәләкәй ауылдарҙа йәшәй. Бәхетебеҙгә күрә, ысын милли мәғариф ауылдарҙа ғына һаҡланып ҡалғайны, хәҙер шул мөмкинлек тә юҡ ителә: мәктәптәр ябылыу менән ауылдар ҙа бөтә барып, телебеҙҙе һаҡлап торған берҙән-бер мөхит юҡҡа сығасаҡ.***

**▶ Башҡорт ҡоролтайы тап ошо осорҙа ҙур абруй ҡаҙанды, уның эшмәкәрлеге һәм башланғыстары власть органдарында ла, халыҡ араһында ла хуплап ҡаршы алынды, тип әйтеп була. Ҡоролтайсылар араһынан халыҡ ихтирам иткән, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлауҙы ышанып тапшырған бик күп шәхестәр үҫеп сыҡты.**

**Нияз МӘЖИТОВ:** Быны халыҡ тарафынан бирелгән объектив баһа, тип ҡарарға кәрәк. Беҙ халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе иң тәүгеләрҙән булып күтәреп сыға инек, һәм беҙҙең эшмәкәрлегебеҙ милләттәштәребеҙ күңеленә хуш килде. Ниндәй генә ҡатмарлы мәсьәләләр килеп тыумаһын, беҙ халыҡтан бер ниҙе лә йәшермәнек, һәр саҡта ла кәңәшләшеп, берҙәм эш итергә тырыштыҡ. Унан һуң, ҡоролтай ҡарамағына Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Курган, Һарытау һәм башҡа өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттарҙы борсоған проблемалар сығарылды, беҙ улар менән бик тығыҙ бәйләнештә эшләнек. Йәмәғәт эшендә халыҡты борсоған проблемаларҙы күтәреп сығып ҡына уңыш ҡаҙанып булмай, уларҙы хәл итеү, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы ғәмәлгә ашырыу юлдарын табыу мөһимерәк. Эшләй алыу һөҙөмтәһендә милли мәнфәғәттәребеҙ менән бәйле байтаҡ ҡына проблемаларыбыҙ уңышлы хәл ителде. Шуныһы ҡыуанысл: дәүләт органдары матди сығымдар менән бәйле саралардан тыш, халыҡтың үҙаңын, рухи-әхлаҡи кимәлен үҫтереүгә йүнәлтелгән ғәмәлдәрҙе хуплап ҡына ҡалмай, төрлө кимәлдәге етәкселәрҙе лә йәлеп итә. Бындай ғәмәли эштәр II ҡоролтайҙан һуң тағы ла әүҙемерәк ойоштороло башланы. Халҡыбыҙҙың тарихи үҙаңын тергеҙеү йәһәтенән алыштырғыһыҙ булған шәжәрә байрамдары, нәҫел-нәсәб, ауыл, ырыу тарихын өйрәнеү дәүләтебеҙҙең милли-мәҙәни сәйәсәтенең иң сағыу күрһәткестәренең береһе булып тора. Радио-телевидение тапшырыуҙарында, гәзит-журнал биттәрендә сығыш яһаусы милләттәштәребеҙҙең әхлаҡи-рухи кимәленең ниндәй юғары булыуына һоҡланмай булмай.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Ҡоролтай дөйөм башҡорт милли хәрәкәте нигеҙендә барлыҡҡа килде, һәм 1995 йылға тиклемге йәмәғәт ойошмаларының да

# Киләсәк

## йәки Өсөнсө ҡоролтайҙа

Йәмәғәт ойошмаһы үҙенән-үҙе генә киҫкен проблемаларҙы хәл итә алмай, бының өсөн урындарҙа ла, республика кимәлендә лә власть органдары менән килешеп, бергәләп эш итә алыу кәрәк. Беҙҙең ул саҡтағы эшмәкәрлегебеҙ республика етәкселегенең хуплауы һәм ярҙамынан башҡа мөмкин дә булмаҫ ине.

**▶ Сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ осоронда ҡоролтай халыҡҡа йүнәлеш биреүсе, уны әйҙәүсе ойошма ролен үтәй алды, тип раҫлау дөрөҫтөр.**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Эйе, халҡыбыҙҙың үҫеш юлдарын билдәләү йәһәтенән ҡоролтай ҙур эш башҡарҙы. Ул милләт киләсәге өсөн иң мөһим проблемаларҙы үҙ ваҡытында күтәреп сыҡты, уларҙы хәл итеү юлдарын билдәләргә тырышты. Әммә бындай мәсьәләләрҙе ул үҙе генә ғәмәлгә ашыра алмай, бының өсөн уның мөмкинлектәре лә юҡ. Дәүләт власы органдары, бигерәк тә закондар сығарыу һәм башҡарма власть менән килешеп эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ. Башҡорт зыялыларының ул саҡтағы төп хыялы - үҙендә үҙ ерендә хужа итеп тоя алыу ине. Тап шуның өсөн 1990 йылдың октябрендә республика суверенитетын иғлан итеү оло ҡаҙаныш һәм тиңдәшһеҙ байрам кеүек ҡабул ителде. Хәҙер ошо байрамыбыҙҙың ситтәре кителде кителеүен, әммә уның республика яҙмышында хәл иткес роль уйнауын инҡар итеп булмай. Ә тәүге ҡоролтайға беҙ бик юғары әҙерлек менән килдек. Ул саҡта һәр кем үҙ теләге менән эш алып барҙы, өҫтән ниндәйҙер күрһәтмәләр көтөп ултырыу юҡ ине. Беҙгә ҡоролтайға программа әҙерләү бурысын йөкмәтеүсе булманы, әммә ул рухи ынтылыш күңелдәребеҙҙә үҙенән-үҙе тыуҙы. Мин ул саҡта ошо юҫыҡта ғилми эш алып бара инем, һәм халҡыбыҙ киләсәген күҙаллаусы документ әҙерләү буйынса Зиннур ағай Ураҡсинға мөрәжәғәт иттем. Программа төҙөү буйынса штаб булдырылды, бик күп тәҡдимдәр йыйылды. Шулай итеп, "Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү программаһы" I ҡоролтай ҡарамағына тәҡдим ителеп, хуплау тапты. Артабан беҙ ошо документты Башҡортостан Хөкүмәтенә тапшырҙыҡ, һәм ул беҙҙең киләсәк эшебеҙ өсөн ныҡлы таянысҡа әйләнде. Минеңсә, III ҡоролтай алдынан ошо программаны, I һәм II ҡоролтай резолюцияларын ҡарап, анализлап, өлгәшелгәндәр менән бер рәттән, әлегә тиклем хәл ителмәй ҡалған проблемаларҙы ла иғтибарға алыу фарыз.

**▶ Элекке осорҙоң идеологик ҡалыптары, сәйәси маҡсатҡа**

***✓ Халҡыбыҙ белем биреү стандарттарының милли-төбәк компоненты бөтөрөлөү менән риза түгел. Әгәр Федераль үҙәк ошо мәсьәләне хәл итергә теләмәй икән, беҙ уны яңынан күтәреп сығырға бурыслыбыҙ.***

**ярашлылыҡ йәиһә туранан-тура баҫым яһау арҡаһында барлыҡҡа килгән милли битарафлыҡтан, манҡортлоҡтан арына барыуыбыҙға шаһитбыҙ. Быны йәмәғәтселек эшмәкәрлегенең бер гүзәл һөҙөмтәһе итеп ҡарап була.**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Төрлө төбәктәрҙә көн итеүсе ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең үҙ милли тамырҙарын табыуы, тормошобоҙҙағы ҡапма-ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға бирешмәүе, теленә, диненә һәм еренә тоғро ҡалыуы халҡыбыҙҙың милли үҙаңы үҫешенең асыҡ сағылышы ул. Әммә халҡыбыҙҙың заман менән бергә атлауына өлгәшеү фарыз бөгөн. Сираттағы ҡоролтайға әҙерлек барышында яңы сәйәси шарттарҙа республика иҡтисадының үҫеш юлдары, халыҡтың шул иҡтисадтағы урынын, өлөшөн, туранан-тура ҡатнашыуын тәьмин итеү юлдары хаҡында уйланыу зарур беҙгә. Ахырынаса хәл ителмәй килгән социаль мәсьәләләр ҙә етерлек әлегә. Иң сетереклеләрҙән һаналып, оҙайлы эш алып барыуҙы талап иткән төп проблемаларыбыҙҙың береһе техник һәм инновацион технологиялар өлкәһендә башҡорт кадрҙарына ҡытлыҡ кисереүебеҙ артабан да дауам итәсәк. Өсөнсөнән, халҡыбыҙҙың яртыһынан күберәге ауылда йәшәй, ә ауыл мәктәптәрен тамамлаған уҡыусылар ҡаланыҡылар менән ярыша алмай. Шуның өсөн вуздарҙа айырым башҡорт төркөмдәрен булдырыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Бына ошо мәсьәләләрҙе хәл итмәһәк, милли кадрҙарыбыҙҙы арттырыу тик һүҙҙә генә ҡаласаҡ.

Киләһе ҡоролтайыбыҙҙа хәҙерге сәйәси хәл менән бәйле тағы ла бер проблема мотлаҡ ҡаралырға тейеш. Халҡыбыҙ белем биреү стандарттарының милли-төбәк компоненты бөтөрөлөү менән риза түгел, һәм Үҙемдең тыуған ауылымда ла шул уҡ хәлде күреп, аптырабыраҡ ҡалам. Беҙҙе башҡортса уҡытманылар, хәҙер башланғыс класта булһа ла уҡытыу үҙ телебеҙҙә алып барыла. Әммә беҙҙе тыйһалар ҙа, үҙ-ара башҡортса һөйләшә инек, ә хәҙер урамда уйнап йөрөгән балалар тик русса ғына аралаша. Бөгөнгө шарттарҙа халыҡ йәшәйешендәге кире күренештәрҙе барлап сығып, төплө анализ биреп, уларҙан арыныу юлдарын билдәләү кәрәк.

**▸ Дәүләт теле булараҡ, башҡорт теленә ихтирам республикабыҙҙа йәшәүсе ватандаштарыбыҙҙа ла бала саҡтан**

лен уҡытыуға ҡаршы хаттар килә лә инде. Дәүләт телен уҡытыу законлы булған хәлдә лә, икенсе бер милләт кешеһенең тел өйрәнеүенең уның шәхес үҫеше өсөн бик файҙалы булыуы хаҡында пропаганда алып барыу кәрәк. Тарихтан билдәле булыуынса, Ырымбур губернаторы вазифаһына тәғәйенләнгән рус чиновниктары урындағы халыҡтың тарихын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеп, хатта бер ни тиклем кимәлдә тел менән дә танышырға тейеш булған. Беҙ ни өсөн үҙебеҙҙең ватандаштарыбыҙға ошо хаҡта һөйләмәйбеҙ, билдәле рус чиновниктарының һәм ғалимдарының башҡорт мөхитен мөкки-лә, пединститутта, университетта башҡорт теле уҡытылмай, элегерәк асылған башҡорт бүлеге ябылырға тора, балалар баҡсалары, гимназиялар юҡ. Бына беҙҙә Магнитогорск ҡалаһы хакимиәте менән хөкүмәти килешеү нигеҙендә эшлекле мөнәсәбәттәр булдырылған, әммә 35 мең башҡорт йәшәгән ҡалала бер генә башҡорт мәктәбе лә юҡ. Ваҡытында беҙ был турала Силәбе губернаторына ла, үҙебеҙҙең Президентҡа ла мөрәжәғәт иткәйнек. Ләкин Магнитогорск ҡалаһы хакимиәте башлығы был мәсьәләне хәл итеүҙән ҡырҡа баш тартты. "Я никогда не соглашусь с созданием башкирских классов или открытием башкирской гимназии, так как это означает развал Российской Федерации", тип асыҡтан-асыҡ белдерҙе ул. Ғөмүмән, Силәбе өлкәһендә башҡорт мәктәптәре кәмегәндән-кәмей бара.

Башҡортостан халыҡтарының милли мәғарифын үҫтереүҙә алдынғыларҙан булып, бер үк ваҡытта ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ мәнфәғәттәренә битараф ҡалыуыбыҙҙы дау-



# ҮҘГӘРЕШТӘРҘӘН БАШЛАНА,

## күтәреләсәк проблемалар тураһында

- заман талаптарына яуап бирерлек милли кадрҙарҙың аҙ булыуы. Кадрҙар сәйәсәтенә яңы һулыш биреү өлгөрөп еткән көнүҙәк проблема итеп ҡаралып, ҡоролтайҙа мотлаҡ тикшерелергә тейештер, тип уйлайым.

**▸ Милли кадрҙар сәйәсәтен үҙебеҙҙең дәүләт органдары һәм учреждениелары ғәмәлгә ашырырға тейештер бит?**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Юҡ, был үтә ҡатмарлы мәсьәләне дәүләт власы органдары үҙҙәре нисек булһа ла хәл итер, тип фекерләү дөрөҫ түгел. Дәүләт власы бар милләттәр өсөн уртаҡ, һәм ул үҙе үк милләтебеҙ мәнфәғәттәренә ярашлы сәйәсәтте бойомға ашырыр, тип көтөп ултырыуҙан файҙа булмаҫ. Кадрҙар сәйәсәтен хәл итеүҙең төп юлы һәм ысулы һөнәри белем алыу өлкәһе менән бәйле. Ҡыҙғаныуға ҡаршы, халҡыбыҙҙың һөнәри белем алыу кимәле, мәҫәлән, яҡуттар йәиһә буряттар менән сағыштырғанда, бик күпкә түбәнерәк. 1000 кешегә тура килгән юғары белемлеләр һаны йәһүдтәрҙә иң юғары булһа, яҡуттарҙа һәм буряттарҙа үҫә барып, 20 проценттан уҙып китте, ә башҡорттарҙа ул ни барыһы 10 процент самаһы ғына тәшкил итә. Шулай булғас, халҡыбыҙҙың белем кимәлен күтәреү өлкәһендә беҙ бөгөн ең һыҙғанып эшләргә бурыслыбыҙ. Икенсенән, уҡымышлы башҡорт зыялыларының күпселеге ауыл хужалығы йәиһә гуманитар өлкәгә ҡарай. Әгәр беҙ халҡыбыҙҙың йәш быуынын техник фәндәрҙе, заман технологияларын үҙләштереүгә, ошо даирәлә юғары белемгә эйә булыуға йәлеп итә алмаһаҡ, инженер-

ошо хаҡтағы халыҡ фекере 260 мең шәхси имза менән нығытылған. Әгәр Федераль үҙәк ошо мәсьәләне хәл итергә теләмәй икән, беҙ уны яңынан күтәреп сығырға бурыслыбыҙ. Әгәр үҙ һүҙебеҙҙе өҫкә сығара алмаһаҡ, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен үҫтереү мөмкинлеге менән бергә ватансыл йәштәр тәрбиәләүҙә лә ҙур юғалтыуҙарға дусар буласаҡбыҙ.

**▸ Халҡыбыҙҙың милли үҙаңы уянған, тергеҙелгән хәлдә лә, ни өсөн ул һәр айырым ғаиләлә тейешле сағылыш тапмай икән?**

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Элек халҡыбыҙ үҫеше өсөн мөмкинлектәр аҙыраҡ булды, хәҙер булғандарын да тейешенсә файҙалана алмайбыҙ, тырышмайбыҙ ҙа. Мәҫәлән, элек балаларыбыҙҙы башҡорт телендә уҡытыу өсөн милли мәктәптәр юҡлыҡҡа зарлана инек, хәҙер улар асылды, ә шул уҡ ваҡытта байтаҡ ҡына милләттәштәребеҙҙең балалары рус мәктәптәрендә уҡыуын дауам итә. Күрәһең, урындарҙағы ойошмаларыбыҙ ҙа эшләп еткермәй, халыҡтың да бер өлөшө битарафлыҡтан сыға алмай.

**уҡ тәрбиәләнергә тейеш. Мәктәп кимәлендә телебеҙгә ҡыҙыҡһыныу артһын өсөн уны өйрәтеүҙең заманса концепцияһы һәм өр-яңы технологиялары булыуы мотлаҡ, ә улар һаман да юҡ әле…**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Милли үҙаң, милли идеялар зыялылар кимәлендә генә ҡалырға тейеш түгел. Беҙ уны һәр төбәктә, районда, ауылда, ғаиләлә ғәмәлгә ашырыу менән шөғөлләнергә бурыслыбыҙ. Төп талаптарҙың береһе - ғаилә ағзаларының мотлаҡ үҙ телендә һөйләшеүенә өлгәшеү. Башҡорт ғаиләһендә әсә теленә ихтирам булмаһа, уны башҡаларҙан нисек талап итергә була? Законға ярашлы, республикабыҙҙа ике дәүләт теле бар, һәм һәр кешегә уларҙы өйрәнеү фарыз. Беҙ уҙғарған тикшеренеүҙәр шуны күрһәтте: рустарҙың 80 проценттан ашыуы балаларының мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүенә ҡаршы түгел, ә 12-13 проценты телде теләк буйынса ғына уҡытыу яғында. Беҙ ошо юҫыҡта бер ниндәй ҙә эш алып бармайбыҙ, ә аңлатыу эше булмаған осраҡта ҡаршылыҡтар килеп сығыуынан ҡотолоп булмаясаҡ. Бына ошо риза булмағандар араһынан төрлө инстанцияларға, гәзит-журналдарға башҡорт те-

бән китеп өйрәнеү традицияларын иҫкә алмайбыҙ? Ә беҙ үҙебеҙҙе киреһенсә тотабыҙ: урындарҙа башҡорт ҡоролтайҙарын, залда рус кешеләре булыуына һылтанып, рус телендә генә алып барабыҙ. Ә бында цивилизациялы илдәрҙә ҡабул ителгәнсә, синхрон тәржемә лә етә бит!

**▸ Дәүләт органдары структураларында сит өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың ижтимағи хәлен, мәҙәни һәм мәғрифәти торошон өйрәнеү, улар менән бәйләнеш булдырыу, ярҙам итеү вәкәләттәре булған бер генә чиновник та юҡ. Ә Мәғариф министрлығының милли мәғариф бүлегендә эшләүсе бер нисә хеҙмәткәрҙең үҙ республикабыҙҙағы мәшәҡәттәре лә баштан ашҡан…**

**Нияз МӘЖИТОВ:** Беҙ һуңғы ваҡытта Башҡортостанда төрлө милләт балаларын 14 телдә уҡытабыҙ, тип йыш маҡтана башланыҡ. Шул уҡ саҡта башҡорт балаларын үҙ телендә уҡытыу процентының түбән булыуына иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Ә күрше өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың балалары хатта үҙ телен предмет булараҡ өйрәнеү мөмкинлегенән дә мәхрүм ҡала бирә. Мин был хәл менән бер нисек тә ризалаша алмайым. Силәбе өлкәһендә 200 меңдән ашыу башҡорт йәшәһә

> **Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:**
>
> ***Суверенлылыҡ үҙбилдәләнеш хоҡуғы нигеҙендә ярала, ул юҡ икән, республика статусын, дәүләтселеген һаҡлап ҡалыу ҙа мөмкин булмаясаҡ. Рәсәй үҙ составындағы республикаларҙы инҡар иткән хәлдә федерация булыуҙан туҡтап, тарҡалыуға дусар буласаҡ. Беҙ ошо хәҡиҡәтте Рәсәй етәкселегенә еткереп кенә ҡалмайынса, бөтә мөмкин булған юлдар менән, Конституция судына тиклем мөрәжәғәт итеп, киләсәгебеҙ хаҡына туҡтауһыҙ эш алып барырға тейешбеҙ.***

ам итәбеҙ. Ҡоролтай был мәсьәлә хаҡында күпме генә һүҙ күтәрмәһен, уны тик дәүләт кимәлендә генә хәл итеп буласаҡ. Әлегә ошо юҫыҡта бер ни ҙә эшләнгәне юҡ.

**▸ Бөгөн халҡыбыҙҙы бәләкәй ауылдарҙа башланғыс мәктәптәрҙең күпләп ябылыуға дусар булыуы ла борсоуға һала. Был күрше өлкәләрҙә лә, үҙ республикабыҙҙа ла урындарҙағы хакимиәттәр тарафынан ҡулайлаштырыу программаһына ярашлы дәүләт күҙәтеүе аҫтында башҡарыла…**

**Нияз МӘЖИТОВ:** Мәғариф учреждениеларын йән башына финанслауға күсеүгә һылтанып, аҙ комплектлы мәктәптәрҙе ябыу дәүләт сәйәсәтенә әйләндерелде. Был башҡорт халҡының милли мәнфәғәттәренә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтереүсе сәйәсәткә тиң, сөнки халҡыбыҙҙың байтаҡ өлөшө бәләкәй ауылдарҙа йәшәй. Бәхетебеҙгә күрә, ысын милли мәғариф ауылдарҙа ғына һаҡланып ҡалғайны, хәҙер шул мөмкинлек тә юҡ ителә: мәктәптәр ябылыу менән ауылдар ҙа бөтә барып, телебеҙҙе һаҡлап торған берҙән-бер мөхит юҡҡа сығасаҡ. Шуға күрә алдағы ҡоролтайҙа ошо мәсьәлә мотлаҡ ҡаралып, дәүләт органдарына тәғәйенләнгән тәҡдимдәр ҡабул ителергә тейеш, тип уйлайым.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Силәбе, Свердловск, Курган, Ырымбур, Һамар өлкәләрендә йәшәүсе милләттәштеребеҙ үҙ ата-бабаларының ерендә көн итә, уларға ҡарата диаспора төшөнсәһен ҡулланыу дөрөҫ түгел. Шуның өсөн уларҙың балаларын уҡытыу өсөн милли мәктәптәр закон нигеҙендә мотлаҡ булдырылырға тейеш.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***✓ Ауылдан ҡалаға килеүсе йәштәрҙе урыҫ мөхите йота бара. Студент йәштәр ҙә бер-береһе менән бик һирәк аралаша, үҙенең милли мәҙәнилеген үҫтереү урынына милләтебеҙгә ят булған ҡараш-ғәмәлдәрҙе үҙ итә башлай.***

# ТҮҢӘРӘК ҠОР

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Рәсәй Федерацияһы этномилли проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтелгән халыҡ-ара документтарҙы ратификацияларға ашығып бармай. Тарихи Башҡортостан ерлегендә милли мәғариф һәм мәҙәниәт усаҡтарын һаҡлау һәм тергеҙеү мәсьәләһен хәл итеүҙе Федераль үҙәктән һәм уның төбәктәрҙәге органдарынан талап итеү шулай уҡ ҡоролтайҙың иң мөһим ҡарарҙары рәтендә булырға тейеш. Ә башҡа төбәктәрҙә йәшәүсе барлыҡ милли диаспоралар бер үк хәлдә көн күрә, шуға күрә уларҙың милли-мәҙәни хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында Рәсәй властарынан айырым закон ҡабул итеүҙе талап итеү фарыз.

**► Ә Рәсәйҙең "Мәғариф тураһында"ғы законында милли мәғариф тигән төшөнсә бөтөнләйгә юҡ. Шулай булғас, милли йәмәғәт ойошмалары үҙҙәренең милли-мәҙәни ихтыяждары үтәлешен тәьмин итерлек Федераль закон акттарын ҡабул итеү тураһында ла һүҙ ҡуҙғатырға тейештер бит.**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Ул ғына ла түгел, бөгөнгө Рәсәйҙә милли мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе министрлыҡ та юҡ. Федератив тип йөрөтөлгән ҙур һәм күп милләтле илдә шундай башҡарма органдың булмауы - ҙур етешһеҙлек. Был бөтә Рәсәй республикалары өсөн уртаҡ мәсьәлә, һәм ул шулай уҡ ҡоролтайҙа ҡаралырға тейеш. Унан һуң, милли төбәктәр өсөн айырым федераль телевидение каналы ла юҡ, махсус гәзит тә сығарыу ҡаралмаған. Федерализм принциптарына ярашлы, бөтә Рәсәй халыҡтарының мәнфәғәттәрен сағылдырған федераль киң матбуғат сараларын булдырыу Үҙәк властарҙың функцияһы булып тора, һәм беҙ ошо талапты мотлаҡ ҡуя алабыҙ.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Владимир Путин власҡа килгәндән бирле федерализм принциптарынан ситләшкәндән-ситләшә барып, унитар дәүләт төҙөү юлына ныҡлап аяҡ баҫтыҡ. Халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, формаль рәүештә булһа ла, Сталин Конституцияһында ла булған, ә хәҙер беҙ үҙ милли мәнфәғәттәребеҙ өсөн юридик нигеҙ булған төшөнсәнән дә мәхрүм ителгәнбеҙ. Суверенлылыҡ үҙбилдәләнеш хоҡуғы нигеҙендә ярала, ул юҡ икән, республика статусын, дәүләтселеген һаҡлап ҡалыу ҙа мөмкин булмаясаҡ. Рәсәй үҙ составындағы республикаларҙы инҡар иткән хәлдә федерация булыуҙан туҡтап, тарҡалыуға дусар буласаҡ. Беҙ ошо хәҡиҡәтте Рәсәй етәкселегенә еткереп кенә ҡалмайынса, бөтә мөмкин булған юлдар менән, Конституция судына тиклем мөрәжәғәт итеп, киләсәгебеҙ хаҡына туҡтауһыҙ эш алып барырға тейешбеҙ. Беҙгә конференцияларҙа, йыйындарҙа иғлан ителгән талаптарыбыҙҙың үтәлеүе өсөн закон сиктәрендә ғәмәли рәүештә сығыш яһарға ла әҙер булырға кәрәк.

**► Милли, сәйәси хоҡуҡтарыбыҙҙы үҙебеҙҙән башҡа бер кем дә яҡлап сыҡмаясаҡ. Әммә һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың сәйәси, ижтимағи әүҙемлеге һүлпәнәйә төштө. Халҡыбыҙҙың рухын, үҙ хоҡуҡтары өсөн берҙәм сығыш яһай алыу ҡеүәһен ниндәй юлдар менән үҫтереп була?**

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Иң һыналған һәм берҙән-бер юл - халыҡ менән эшләү. Урта һәм оло быуындарыбыҙ совет осорондағы "Белем" йәмғиәте ойошмаһын хәтерләйҙер. Ошо ойошма лекторҙары иң төпкөл ауылдарға тиклем барып етеп, төрлө йүнәлештәр буйынса мәғлүмәт таратыу, аңлатыу һәм өгөт-нәсихәт эштәре алып бара торғайны. Ҡоролтай эшендә лә ошондай һөҙөмтәле эш тәжрибәһен ҡулланыу файҙалы булыр ине. Беҙҙең зыялыларыбыҙ халыҡ араһына сыҡмай башланы хәҙер. Халыҡ гәзит-журналдарҙы ла аҙ алдыра, Башҡортостан телевидениеһы тапшырыуҙарынан сериалдарҙы өҫтөнөрәк күрә, күп ауылдарҙа юлдаш антенналары БЮТ каналын да тотоуға көйләнмәгән. Әлбиттә, бындай шарттарҙа барыһынан да сәйәси әүҙемлек көтөп булмай. Шуға күрә халыҡта яңы ҡараш булдырыу өсөн мотлаҡ күҙмә-күҙ аралашыу һәм ойоштороу эштәрен башлап ебәреү талап ителә. Быны беҙ үҙ тарихыбыҙ миҫалында ла бик асыҡ күрәбеҙ. Заманында урыҫ зыялыларының "народничество" тип аталған хәрәкәте халыҡ аңын үҫтереү өсөн бик күп көс һалыуын беләбеҙ. Бындай эштәрҙе төпкөл ауылдарҙа, бигерәк тә йәштәр араһында яңынан башлап ебәрһәк, һәйбәт һөҙөмтәләргә өлгәшеп булыр ине.

Беҙ йәш быуындан сыҡҡан зыялыларыбыҙға өмөт бағлайбыҙ. Тик уларға ла йүнәлеш биреү кәрәк: төрлө вуздарға, сит илдәргә уҡырға ебәрелгән йәштәребеҙ үҙ халҡына хеҙмәт итеүен дауам итерме һуң? Хәҙер райондарҙан баш ҡалаға уҡырға килеп, үҙ төбәктәренә ҡайтаһы килмәгәндәр ҙә бик күп бит. Был эшебеҙҙе юридик яҡтан нигеҙлерәк һәм ышаныслыраҡ итә алыу фарыз. Аңлы, белемле, һөнәри һәм ижади яҡтан юғары кимәлгә күтәрелгән йәштәребеҙ бар, әммә улар әлегә һанаулы ғына.

Беҙ бер етешһеҙлегебеҙҙән арына алмайбыҙ. Әйтәйек, ниндәйҙер бер проблеманы ҡуҙғатабыҙ, һөйләйбеҙ, бер-беребеҙҙе өгөтләйбеҙ, ә уны хәл итеүҙең ғәмәли механизмдарын булдыра алмайбыҙ. Бына үҙҙәрен башҡасараҡ тотоп, йәиһә үҙебеҙҙән ҡайһы бер яҡтары менән айырылып торғандар менән мөнәсәбәттәребеҙҙе көйләүҙә барыһын да уйлап, бер кемдә лә икеләнеү йәиһә шөбһәләнеү ҡалмаҫлыҡ итеп эшләп еткермәйбеҙ. Әйтәйек, сығышы менән аҫаба башҡорт вариҫтары булған милләттәштәребеҙҙең 20 проценты тиерлек татар теленә яҡыныраҡ булған көнбайыш диалектында һөйләшә. Ә беҙ күп йылдар дауамында уларҙы үҙебеҙгә яҡынайтыу урынына төрлөсә ситләтеү яғын ҡараныҡ түгелме ни? Беҙҙең менән бер төптән сығыуҙарын иҫтә тотоп, көнбайыш башҡорттары менән мөнәсәбәттәребеҙҙе айырым бер программаға нигеҙләп ҡора алыу зарур. Уларға үҙ шәжәрәләрен өйрәнеү мөмкинлеген биргәс, ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең үҙ асылына ҡайтыу яғын өҫтөн күреүенә инандыҡ бит. Әммә был юҫыҡта аралашыу-аңлашыуыбыҙҙы дауам итеү кәрәк, шунһыҙ элекке бөтөнлөгөбөҙҙө тергеҙеү мөмкин булмаясаҡ.

Тағы ла мине борсоған бер проблема - ауыл - ҡала мөхите мөнәсәбәттәрен көйләү. Хәҙер ауыл үҙ яйына ҡалдырылып, уның яҙмышы үҙ ҡарамағына тапшырылды. Ә ауыл үҙе генә үҙ хәлен үҙгәртә алырмы һуң? Унан, ауылдан ҡалаға килеүсе йәштәрҙе урыҫ мөхите йота бара. Хатта студент йәштәр ҙә бер-береһе менән бик һирәк аралаша, үҙенең милли мәҙәнилеген үҫтереү урынына милләтебеҙгә ят булған ҡараш-ғәмәлдәрҙе үҙ итә башлай. Һанай башлаһаң, хәл итеүҙе талап иткән башҡа бихисап мәсьәләләргә иғтибар итергә була. Өлгәшелгәндәр менән генә ҡәнәғәтләнеп йәшәүҙән фәтүә юҡ. Шуның өсөн яңы заманға ярашлы яңыртылған оло программа өҫтөндә эште кисекмәҫтән башлау фарыз. "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" тигән федераль программа ла беҙҙең туранан-тура ҡатнашлығыбыҙ булмайынса ғәмәлгә ашырылмаясаҡ. Был эштәр беҙҙән бөгөн үк ҙур әүҙемлек талап итә.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙ халҡыбыҙ тарихынан һабаҡ алып йәшәргә өйрәнергә тейешбеҙ. Заманында йөҙәрләгән мең милләттәшебеҙ йәшәгән Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға, Сарапул яҡтарында бөгөн үҙен башҡорт тип танығандар юҡҡа иҫәп: улар үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен ташлап, Башҡортостанға күсеп китмәгән бит. Бөгөн Татарстанда 14 меңләп кенә башҡорт йәшәй, һәм уларҙың үҙ телен өйрәнеү мөмкинлеге юҡ. Башҡа өлкәләрҙә генә түгел, үҙ республикабыҙҙа ла III ҡоролтай күтәреп сыҡҡан проблемаларҙы хәл итеүҙе Президент хакимиәте, Хөкүмәт һәм республика парламенты үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Шунһыҙ халҡыбыҙ үҫеше тураһында һөйләү буш һүҙ буласаҡ. Ҡоролтай ҡарарҙары һүҙҙә генә ҡалмаһын ине.

**Нияз МӘЖИТОВ:** Республикала йәшәгән халыҡтың барыһының да йәшәү шарттары бик яҡшынан тип әйтеп булмай. Дөйөм алғанда, халҡыбыҙҙың яртыһынан күберәге матди яҡтан үҙенүҙе етерлек кимәлдә тәьмин итә алмай. Был иң әүәл эшһеҙлек менән бәйле. Бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр араһында эшһеҙҙәр күп. Улар ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүҙән килем алып булмау арҡаһында ҡалаларға китеп, ҡаңғырып йөрөй. Йәштәрҙең күпләп ситкә китеүе арҡаһында ауылдар бәләкәйләнә, мәктәп йәшендәге балалар аҙайғандан-аҙая бара. Был бөтә дәүләт кимәлендәге мәсьәлә шулай уҡ ҡоролтайға сығарылырға тейеш. Тағы ла бер мәсьәлә - йәштәргә башланғыс һөнәри белем биреү. Элек был эш планлы рәүештә, төптән уйлап башҡарыла ине. Бөгөн дәүләт ошо йүнәлештә ойоштороу эштәрен әүҙемләштермәһә, цивилизациялы илдәрҙән һәм халыҡтарҙан тиҫтәләрсә йылдарға артта ҡалыуыбыҙ дауам итәсәк.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Халыҡ әйткәнсә, дәүләткә генә ышанып ултырып, ыштанһыҙ ҡалыубыҙ бар. Бына беҙ ҡоролтайға әҙерлек барышында башҡорттар араһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса конференция уҙғарырға булдыҡ. Башҡорт эшҡыуарҙарын барлап ҡараһаҡ, уларҙың иҫ киткес аҙ булыуына инандыҡ. Ҡалаларҙа ла, ауылдарҙа ла шул уҡ хәл. Фермерҙарыбыҙ ҙа, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәребеҙ ҙә бик аҙ. Әлбиттә, дәүләт яғынан был юҫыҡта ойоштороу һәм ярҙам итеү кәрәк. Бигерәк тә халҡыбыҙҙың ғәҙәти кәсептәрен тергеҙеү отошло булыр ине.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Ауылдарҙа эшһеҙлек булырға тейеш түгел. Беҙҙә яңыса хужалыҡ итеүгә өйрәтеү, ойоштороу эштәре һүлпән ҡуйылған. Шул уҡ ваҡытта йәштәребеҙҙе сәнәғәт өлкәһенә йәлеп итә алмаһаҡ, был өлкәлә инженер һәм етәксе кадрҙарыбыҙ булмаясаҡ. Тик боронғоға ғына йәбешеп ятһаҡ, яңы технологиялар заманында беҙҙең кәрәгебеҙ ҡалмаясаҡ. Урал арьяғы төбәгендә, төньяҡ-көнсығышта сәнәғәт предприятиелары юҡҡа иҫәп. Сәнәғәт үҫешмәгән райондарҙа халҡыбыҙ цивилизациянан артта ҡалып йәшәй. Шул уҡ ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү предприятиелары төҙөүгә дәүләт инвестицияларын йәлеп итеү хаҡында һүҙ башлау кәрәктер. Ғөмүмән, республикабыҙ сәнәғәте структураһын үҙгәртеп ҡормайынса, ниндәйҙер яңы технологиялар, яңы предприятиелар хаҡында һүҙ ҡуҙғатыу ҡыйыныраҡ.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Мәҫәлән, Башҡортостанда бер генә лә заманса тире эшкәртеү заводы юҡ. Ә беҙҙә элек-электән малсылыҡ тармағынан алынған продукцияның бер бәләкәй киҫәге лә әрәм-шәрәм ителмәгән бит. Малсылыҡ менән шөғөлләнәбеҙ, ә уны сәнәғәти предприятиелар менән тулыландырыу хаҡында уйламайбыҙ. Был бик күңелһеҙ күренеш: кем 1000 тире хаҡына бер тун һатып ала икән?

**► Ҡоролтай кеүек ҙур һәм абруйлы йәмәғәт ойошмаһының эшмәкәрлеген уның етәксе органдары, идара итеү аппараты һәм финанслау мөмкинлектәренән башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Шул уҡ ваҡытта эштәребеҙҙе финанслау ҡалай етте, шулай башҡарыла. Беҙ был мәсьәләне тейешле кимәлдә хәл итеү юлын табырға тейешбеҙҙер бит...**

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Ҡоролтай халыҡ мәнфәғәттәре өсөн эшләй, һәм уның эшмәкәрлеген бағымсылар табып, ниндәйҙер фонд ойоштороп ҡына етерлек кимәлдә финанслап булмай. Ғөмүмән, төп ойошмабыҙҙы финанслау дәүләт кимәлендә, махсус закон менән хәл ителһә, бик уңайлы булыр ине.

**Нияз МӘЖИТОВ:** Урындарҙа йәиһә баш ҡалала уҙғарылған һәм финанслауҙы талап иткән саралар муниципаль йәки дәүләт органдарының ижтимағи һәм мәҙәни эштәр пландарына индерелгән хәлдә финанслау мәсьәләһен бик ябай рәүештә хәл итеп була.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Ҡоролтай эшмәкәрлеге өсөн йыйылған финанс сараларының нисек ҡулланылыуының үтә күренмәле, асыҡ булыуы мотлаҡ. Дөйөм эшкә иғәнә биреүселәр, хәйриә ярҙамы күрһәтеүселәр элек тә булған, хәҙер ҙә бар. Бында иң мөһиме - кешеләрҙең үҙҙәре биргән аҡсаның һөҙөмтәле эштәр өсөн файҙаланасағына ышанысы булыуы. Финанс фонды булдырылған хәлдә уның абруйлы шәхестәрҙән торған Попечителдәр советы һайланыуы ла мотлаҡ.

**► Ҡоролтайҙың Башҡарма комитетының ойоштороу эштәренә тотҡарлыҡ иткән, ҡамасаулаған хәлдәр бар. Һуңғы арала Башҡарма комитет етәкселегенең йыш алмашынып тороуы, Уставҡа тап килмәгән ҡарарҙар ҡабул итеү, кооптация аша һайланған ағзаларҙың легитим булыу-булмауы кеүек һорауҙар ҙа килеп сығып тора. Ғөмүмән, йәмәғәт ойошмаһы һәм ҡайһы бер дәүләт чиновниктары араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә борсолоу тыуҙыра. Ошо йәһәттән һеҙ ни әйтер инегеҙ?**

**Нияз МӘЖИТОВ:** I һәм II ҡоролтай араһында эшләгән Башҡарма комитет йәмәғәтселек эштәренә меңәрләгән әүҙем милләттәштәребеҙҙе йәлеп итә алды. Ҡоролтай комиссиялары башҡарылған эштәр тураһында даими рәүештә отчет бирә ине. Һуңғы осорҙа комиссиялар элекке кеүек әүҙем эшләмәй башланы, ғөмүмән, ҡоролтайҙың абруйы ла, йоғонтололоғо ла кәмене. Был бер нисә йыл эсендә Башҡарма комитет рәйесенең дүрт мәртәбә алыштырылыуы менән дә бәйле икәнен инҡар итеп булмай. Был ҙур етешһеҙлек, ә йәмәғәтселек эшендә административ баҫым яһау бер ниндәй ҡалыпҡа ла һыймай. Ҡоролтай эшендә лә күп нәмәне тәжрибәле һәм әүҙем кадрҙар хәл итеүен онотмаһаҡ ине, тим.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:**

***Элек халҡыбыҙ үҫеше өсөн мөмкинлектәр аҙыраҡ булды, хәҙер булғандарын да тейешенсә файҙалана алмайбыҙ, тырышмайбыҙ ҙа. Мәҫәлән, элек балаларыбыҙҙы башҡорт телендә уҡытыу өсөн милли мәктәптәр юҡлыҡҡа зарлана инек, хәҙер улар асылды, ә шул уҡ ваҡытта байтаҡ ҡына милләттәштәребеҙҙең балалары рус мәктәптәрендә уҡыуын дауам итә. Беҙҙе башҡортса уҡытманылар, хәҙер башланғыс класта булһа ла уҡытыу үҙ телебеҙҙә алып барыла. Әммә беҙҙе тыйһалар ҙа, үҙ-ара башҡортса һөйләшә инек, ә хәҙер урамда уйнап йөрөгән балалар тик русса ғына аралаша.***

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ:** Дәүләт менән йәмәғәт ойошмаһы араһында килешеп эшләүгә өлгәшеү зарур. Власть вәкәләттәре булған дәүләт чиновниктары ҡоролтай эшенә кәңәшләшеп тә тормайынса, нисек теләйбеҙ, шулай буласаҡ, тип, тупаҫ рәүештә ҡыҫылмаһын ине. Дәүләт органдарының һәйбәт кәңәш-тәкдимдәренә, ваҡытлы һәм урынлы ярҙамына һәр саҡ ризабыҙ. Башҡарма комитеттың Советы ла бар, ә уның ултырыштарына чиновниктар кәңәштәнәш итеү өсөн килеүҙе кәрәк тип тапмай. Быны әүҙем һәм абруйлы шәхестәребеҙҙең фекерен һанға һуҡмау, тип баһаларға кәрәк. Тормошоборҙа ла, ҡоролтай эшмәкәрлегендә лә ниндәйҙер үҙгәрештәр булып, шуға ярашлы гәмәлдәр башҡарыла. Шуның өсөн ҡоролтай Уставына тейешле үҙгәрештәр индереү ҙә өлгөрөп еткән мәсьәлә. Шулай уҡ ҡоролтай комиссияларының статусын күтәреү, уларҙың эшенә әүҙем, йәш зыялыларҙы йәлеп итеү кәрәк. Ҡоролтай вертикале булдырылып, уның тәүге ойошмалары һәр бер ауылда эшләгән осраҡта эшебеҙ һөҙөмтәлерәк булыр, тип иҫәпләйем.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙҙең тағы ла бер етешһеҙлегебеҙ бар: башҡа милли республикаларҙың йәмәғәт ойошмалары менән сағыштырып ҡарағанда, беҙ һирәк йыйылабыҙ. 7-8 йыл - хәҙерге динамикалы осор өсөн бик ҙур арауыҡ. Ҡоролтайҙы 2-3 йылға бер йыйғанда ла зыян булмаҫ ине. Ә уның Уставын заманыбыҙға яраҡлаштырып үҙгәртеүҙе мотлаҡ тип иҫәпләйем. Һирәк йыйылыуыбыҙ арҡаһында хатта ҡатмарлыраҡ мәсьәләләрҙе лә дәүләт чиновниктары тотҡан урындан һындырып, үҙҙәренсә хәл итеүҙе артыҡ күрә башланы. Тап шундай шарттарҙа аңлашмаусанлыҡ һәм конфликттар килеп сыға. Етәксе кадрҙар менән һағыраҡ мөғәмәлә итеү, башҡа мәсьәләләрҙә лә консенсусҡа килеү юлдарына өҫтөнлөк биреү фарыз. Йәмәғәт эштәренә ваҡыт бүлергә ынтылған шәхестәребеҙҙе ситкә типмәйек, улар данхөрмәт тип түгел, туған халҡы мәнфәғәттәре өсөн үҙ көсөнән килгәнде үтәргә тырышып йөрөй. Ғөмүмән, ҡоролтайҙың һәм уның етәкселәренең дәүләтебеҙҙәге статусын күтәреү тураһында уйларға кәрәк. Ҡоролтай етәкселәренең министрҙар, башҡа ведомство башлыҡтары менән туранан-тура бәйләнештә эшләү хоҡуғы булырға тейеш. Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағында булһа, күп кенә проблемаларыбыҙҙы тиҙерәк хәл итә алыр инек. Республика кимәлендәге етәксе кадрҙарҙы тәғәйенләгәндә ҡоролтай фекере лә иҫәпкә алынырға тейештер.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әүҙем йәмәғәт эшмәкәрҙәре булараҡ та танылыу тапҡан арҙаҡлы ғалимдарыбыҙ III Бөтөн донъя ҡоролтайы трибунаһынан халҡыбыҙ игтибарына тәҡдим итерҙәй уй-фекерҙәре менән ихлас уртаҡлашты. Уларҙың граждандыҡ, милли рух менән һуғарылған фекер-тәҡдимдәре ҡоролтай делегаттарына халҡыбыҙҙың оло форумына әҙерләнгән мәлдә үҙ позицияһын билдәләргә ярҙам итер, тип өмөтләнәйек.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

*ЗАУЫҠ*

# ҮҘЕМДЕ МИН, ДОНЪЯ МӨХӘББӘТТӘН

## Ҡотайыр, тип хәҙер йыуатам...

ТОЙҒОН.


Шағир Тойғон һәм ейәнсәре Алина.

### Теге заман булһа

-Утыҙ ете,- тиеп йыш һөйләйҙәр,
Һөйләрлектер, күп шул ҡорбаны.
Хаҡлы-хаҡһыҙын да тыңлай торғас,
Күңелемде бер уй арбаны:
-Мине лә, тим, ҡулға алырҙармы,
Шул осорҙа әгәр йәшәһәм?
Күп ҡыйылған ул саҡ аҫыл ғүмер -
Халҡы өсөн күкрәп йәшнәгән...

-Ниңә? - тиеп һорау биреү артыҡ,
Яуаптары уның туйҙырған.
Ул заманды, беләм, кешеләге
Мәкерлек бит үҙе тыуҙырған.

Көнсөллөк тә ситтә ҡалмағандыр,
Ҡалмағандыр ситтә үс тотоу...
Утыҙ етеләге вәхшилекте
Мөмкин түгел әле онотоу!

Онотмаған өсөн дә бит яҙам
Был шиғырҙы, әрнеп яңынан...
Тура һүҙем өсөн үҙемдән үс
Алманылармы ни һуңынан?

Ваҡытында ауыҙ йомманым шул -
Тыуҙы шуға нахаҡ бәләһе.
...Теге заман булһа, күптән ҡулға
Алыныр инем мин дә, билләһи!

* * *

Хаталарым - аяғыма кейер
Ҡаталарым булды йыш ҡына.
Шуғалыр ҙа ҡай саҡ яҙа баҫтым-
Иҫән ҡалды, ярай, баш ҡына.

Юл йөрөүҙән аяҡ кейемдәре
Туҙа, беләм...
Минең ҡаталар,
Киреһенсә, гел яңырып торҙо-
Ҡабатланған һайын хаталар.

Шуға бәйле ҡырыҫ һорау тыуа:
(Был ҡыланыу түгел хаяһыҙ)
Рәсәй тигән илдә кешеләргә
Мөмкинме һуң йәшәү хатаһыҙ?

Яуаптары ауыр был һорауҙа
Яҙмыш фажиғәһе сағыла.
... (Э) Рәсәйгә әммә тел тейҙереп,
Яһаным мин хата тағы ла...

### Мөхәббәттән донъя ҡотайыр

Үтә йылдар...
Ғүмер бизмәненең
Баҫам инде теге яғына.
"Минә арнап шиғыр яҙсы!" - тигән
Теге ҡыҙҙы күңел һағына.

Үтенесе үтескәгә ҡалған -
Аҡланыр һүҙ ҡайҙан табайым?
"Матур кеше матур ҡартая" - тип
Әйтә торған ине апайым.

Ул апайым күптән әбей инде,
Йәш түгелмен мин дә - оломон.
Тик барыбер мөхәббәттең һаман
Аҡыл ултырмаған ҡоломон.

Шуғалыр ҙа мине генә түгел,
Теҙ сүктерә әллә кемдәрен.
Назар Нәжми юҡҡа әйтмәгән шул:
-Аңлайым,-тип, -Гете хәлдәрен...

Аңлар йәштә мин дә...
Яуаптарҙың
Гел табырмын кеүек ҡулайын.
Тик бер аҙға шиғриәттә түгел,
Мөхәббәттә Гете булайым.

Аңлашыла хәҙер теге ҡыҙҙың:
-Шиғыр яҙ? - тип ниңә һорауы.
Минең кеүек уның сәсенә лә
Ҡунды микән йылдар ҡырауы?

Ҡабатлайым апайымдың һүҙен:
-Матур кеше матур ҡартайыр...
Гетеға тиң бер яҙыусы әйткән:
-Матурлыҡтан донъя ҡотайыр!

-Ай-һай! - тимен...
Беҙҙең заман өсөн
Был төшөнсә булыр уйҙырма.
Ник матурлыҡ үҙе кешеләрҙә
Көнсөллөк һәм талаш тыуҙыра?

Был һорауға хатта апайым да
Яуап бирә алмаҫ ҡапылдан.
"Шиғыр яҙсы?" - тигән ҡыҙҙы күрһәм,
Мин яҙырмын һымаҡ аҡылдан.

Шуға ла бит уны күргем килмәй
Һәм күрһәткем килмәй үҙемде.
Ун алтыла нисек матур күрһәм,
Шулай ҡалһын - йәндә күҙ инде.

Күҙҙәремдән түгел, күңелдәрем
Ҡайтыуынан ҡурҡам, ут йотам...
Үҙемде мин, донъя мөхәббәттән
Ҡотайыр, тип хәҙер йыуатам.

### Йәбешмәнем

*(Шаярыу ҡатыш)*

Күңелемдә таҡмаҡ көйө
Йәшәйһең һаман, Әбеш:
-Әбеш ҡыҙҙары осраһа,
Тот та биленә йәбеш!

Йәбешмәнем...
Сәләм бирҙем,
Алманы сәләмемде -
Әйләндерҙе ҡара төнгә
Ҡояшлы ғәләмемде.

Йәбешмәнем...
Ҡаш һикерттем,
Ут сәсте күҙҙәренән.
Телһеҙ ҡалдым:
-Нахал!- тиеп
Ҡысҡырған һүҙҙәренән.

Йәбешмәнем...
Ҡул болғаным,
Һалышты күрмәгәнгә.
Төңөлдөм мин йән атыуым
Һөҙөмтә бирмәгәнгә.

Үтте йылдар...
Теге таҡмаҡ
Хәтеремдә шул килеш.
Әбеш ҡыҙы булалманы
Өләшкә төшкән көмөш.

Көмөш нимә?
Мәле еткәс,
Алтынын таптым һымаҡ.

Хәҙер ул ҡыҙ ҡыланышы
Түгел инде сер-йомаҡ.

Ләкин ҡай саҡ иҫкә төшһә,
Көсәйә йөрәк тибеш.
-Әбеш ҡыҙҙары осраһа,
Тот та биленә йәбеш!

Шул таҡмаҡты йыш ишетер
Килгән кеше был яҡҡа.
Шуға күрә шиғырҙы ла
Яҙыуым түгел юҡҡа.

* * *

Иҫән саҡта йәлләнеләр:
-Эскәнгә яналыр йөрәге бахырҙың.
Үлгәс, яр һалдылар:
-Халҡы өсөн янды йөрәге шағирҙың.

### Ташланым

*(Шаярыу)*

-Һай, афарин!- тигәнерәк
Маҡтау һүҙҙәр көсәйҙе,
Халыҡ алдында әйткәс Ислам:
-Ташланым,- тип, - эсеүҙе!

-Күҙгә ҡарап алдаша,-тип
Кемеһелер пыр туҙҙы.
Өҫтәп тағы әйтте Ислам:
-Ташланым, -тип, - тартыуҙы!

Ҡояш булып балҡый йөҙө -
Маҡтауҙан ул ҡәнәғәт.
-Былар нимә? Тегеһен дә
Ташланым, -ти, -йәмәғәт!

Хәҙер инде маҡтау ҡатыш
Аптырайҙар: - Кит сәле!
Кет-кет көләп аҡрын ғына
Һүҙ башланы мут Сәлим:
-Эсеүҙе бит ташлаһаң да,
Башлап була - беләһең.
Тартыуҙы ла ташлаһаң да,
Башлап була - теләһәң...

Тел төбө бит мут Сәлимдең
Аңлашылды һуңынан:
-Ә тегеһен ташлаһаң,- ти,-
Башлап булмай яңынан!

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

## ИР-АТ КҮПТЕ ЯРАТА

**ҺОРАУ: Ниңә кеше, бигерәк тә ир-ат, ғүмер буйы бер кешене генә яратып йәшәй алмай?**

Был һорауға төрлө позициянан сығып, төрлөсә яуап бирергә булалыр. Күп осраҡта ҡыҙ-ҡатын - ир-атты, ир-ат ҡыҙ-ҡатынды хыянатта ғәйепләй, үҙҙәрен аҡлай башлай. Быны, мин, мәҫәлән, ир-аттың ни өсөн бер генә кешене яратып йәшәй алмауын аңлата алам. Ир-аттың полигамлығы уларҙың тәбиғәтенә һалынып, хатта күп ҡатын алыу хоҡуғы Ҡөрьән менән нығытылған. Дин быны рөхсәт итә икән, тимәк, ирҙәрҙең күп ҡатын алыуының кешелеккә файҙаһы бар. Ир-ат тәбиғәтенә һунарсы ҡомары, төрлөлөккә ынтылыу, эҙләнеүсәнлек хас. Уларҙың аҫҡы аңына төрлөлөк сылбырындағы өҫтөнлөктө (доминантаны) эҙләү механизмы һалынған. Шуға күрә илгә, милләткә шәхес, батыр тыуһын өсөн ирҙәр төрлө йәштәге төрлө ырыу ҡыҙҙарына өйләнгән. Хәҙер иһә, ир-атка тәбиғәт тарафынан һалынған был механизм һаман да эшләүен дауам итә, уны бер кем дә тыя һәм һүндерә алмай. Шуға күрә, әгәр ҙә өйләнгән ир-ат ситкә ҡарай икән, быны тик бер яҡлы - аҙғынлыҡ, тип кенә аңларға кәрәкмәйҙер. Ә ҡыҙ-ҡатындарҙың тәбиғәтенә милләттең, ырыуҙың генофондын һаҡлау механизмы һалынған. Был хаҡта мин "Киске Өфө"лә сығыш яһағаным бар.

**Ринат ЙОСОПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАНДАРИН АША... ябығырһың

■ Антибиотиктар ҡабул иткән ваҡытта һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә Миссуриланың Медицина мәктәбе университеты белгестәре. Баҡтиһәң, бындай дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау ишетеү һәләтенең насарайыуына килтереүе ихтимал икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ике препарат - канамицин һәм уның балалар өсөн тәғәйенләнгән аналогы гентамицин нигеҙендә үткәрә. Был ике препарат та ауырыуҙарға йыш тәғәйенләнә. Табип билдәләгән дозаны 10-20 процентҡа ғына арттырыу ҙа ишетеү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтимал, тигән һығымтаға килә ғалимдар.

■ Мөһим ҡарарҙарҙы ятып хәл итеү яҡшыраҡ, тип белдерә Австралия ғалимдары. Экспериментта төрлө интеллектуаль һәм белем кимәле төрлө булған 20 кеше ҡатнаша. Уларға 32 башватҡыс тәҡдим ителә, уларҙың яртыһын тороп, яртыһын ятып сисергә кәрәк була. Тикшереүҙәр һуңында горизонталь торош иң продуктив, тип табыла. Ғалимдар быны шулай тип аңлата: кеше баҫып торған саҡта унда танып-белеү һәләте менән бәйле эшмәкәрлек өсөн кәрәк булған норадреналин бүленеп сыға, ул, үҙ сиратында, ижади фекерләүҙе аҡрынайта. Ә ятҡан саҡта был матдә аҙыраҡ бүленә һәм мейе яҡшыраҡ эшләй башлай.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ни тиклем кеше олораҡ, ул шул тиклем аҙыраҡ йоҡлай, тип белдерә. Улар тикшеренеүҙәр ярҙамында түбәндәгеләрҙе асыҡлаған: 20 йәштән 30 йәшкә тиклемге йәш кешеләргә үҙен яҡшы тойоу өсөн тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡо кәрәк. 30-ҙан олораҡтарға 7 сәғәттән аҙыраҡ йоҡлау ҙа етә, ә унан да олораҡтарға тәүлегенә алты сәғәттән дә аҙыраҡ йоҡлау тап-таман. Тикшеренеүҙәр тағы ла шуны күрһәткән: кеше ни тиклем олораҡ, улар йоҡоһоҙлоҡтан яфалана, ә йәштәргә түйғансы йоҡлау һирәк эләгә.

■ Табиптар, атеросклерозға килтерә, тип, йомортҡаны тыя ине, сөнки уның составында булған холестерин матдәләр алышыныуына насар тәьҫир итә. Әммә Америка ғалимдары быны кире ҡаға: тикшереүҙәргә ярашлы, көн һайын рационға йомортҡа индереү йөрәк тамырҙарына яҡшы тәьҫир итә.

■ Мандарин артыҡ ауырлыҡ менән көрәшергә ярҙам итә. Көньяҡ Корея ғалимдары был емештәрҙе тикшереп, уларҙың тәндә йыйылған майҙарҙан ҡотолорға булышлыҡ итеүен асыҡлаған. Экспериментарҙа 60 мәктәп уҡыусыһы ҡатнашҡан. Уларҙы ике төркөмгә бүлеп, беренсе төркөмгә ике ай дауамында мандарин һуты биргәндәр. Тикшеренеү барышында ике төркөм дә физик күнекмәләр яһаған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, беренсе төркөм икенсе төркөмгә ҡарағанда 1,5 процентҡа күберәк ауырлыҡ юғалтҡан.

■ Инглиз ғалимдары сәйҙең яңы файҙалы үҙенсәлектәрен асыҡлаған. Баҡтиһәң, сәй һөйәктәрҙе нығытырға ярҙам итә икән. Быны өсөн көнөнә бер нисә сынаяҡ сәй эсеү ҙә етә. Белгестәр шулай уҡ ауыҙ ҡыуышлығын йәшел сәй менән сайҡатыу файҙалы икәнлеген белдерә. Йәшел сәйҙә булған фторид теш эмален һаҡлай. Ә Америка ғалимдары көнөнә 4-5 сынаяҡ йәшел сәй эсеү тире яман шешенән һаҡлауын асыҡлаған. Уның составындағы антиоксидантлар тиренe ультрафиолеттан яҡшы һаҡлай.

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

**Беҙҙең быуын кешеләре шулай тәрбиәләнгән: ҡул менән тотоп, күҙ менән күреп, физик приборҙар ярҙамында иҫбатлап булмай икән, ул хәлдең булыуы мөмкин түгел. Ләкин бөйөк Сократтың, мин был донъяла бер нәмә лә белмәгәнемде генә беләм, тигәнен иҫкә алһаҡ, мәңгелектең кескәй генә бер киҫәге - фанилыҡта йәшәгән әҙәм балаһының белгәндәре - океандың бер тамсыһы ғыналыр. "Минең баҡыйлыҡҡа күсеүемде күк йөҙөнә ҡарап белерһегеҙ", - тигән Ейәнсура районы Үрген ауылында йәшәгән Әхмәтбаҡый хәҙрәт. Һәм берҙән-бер көндө күк көмбәҙендә ғәрәп хәрефтәре менән семәрле яҙма хасил булла. "Әхмәтбаҡый хәҙрәт вафат булды", - тигән һүҙҙәр тукылған була унда...**

# ӘХМӘТБАҠЫЙ ХӘҘРӘТ

Республикала матур шәхестәре менән билдәле, уҡымышлылар төйәге /ауылдан ике фән докторы, 12 фән кандидаты сыҡҡан/ Үрген - иң ҙур башҡорт ауылдарының береһе. Илаһи тау теҙмәләре ҡосағында иркә балалай ирәйеп ултырған был ауылдың, ғалимдар әйтеүенсә, мең йыллап тарихы бар. Ошо ауыл уҙаманы, урындағы тарихсы Иршат Йәнбирҙин иҫбатлауынса, был мөһабәт тауҙарҙың ҡая таштарында боронғо башҡорт яҙмалары һаҡланыуы ла билдәле.

Йәшәмәккә йәтеш был урын бик борондан ил ағалары ышаныслы төйәк булған. Ғалимдар әйтеүенсә, ауылға ырыу башлығы Үҫәргән бейҙең ейәне Бишәй нигеҙ һалған. Үҫәргән ҡарт та, шулай уҡ ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, ырыу башлығы Түңгәүер ҙә ошонда ерләнгән. Үрген - мәшһүр сәсән, Азия һәм Ҡаҙағстан далаларында ла даны киң таралған Ерәнсә батыр, уның ҡатыны, ил инәһе Бәндәбикә әүлиә йәшәгән төбәк. Шуға күрә лә халҡыбыҙҙың тарихи ҡомартҡылары - изге урындары күп был ауылдың: Ерәнсә сәсән ҡәбере, Ерәнсә осҡан ҡая, әүлиә шишмәһе, хәҙрәт зыяраты... Һәр береһенең үҙ тарихы, үҙ легендаһы. Башҡортостанда ғына түгел, унан көньяҡҡа ары ла күслә табип булараҡ танылған әүлиәүи зат Әхмәтбаҡый хәҙрәт тураһында булыр артабанғы һүҙебеҙ.

**Үрген ауылы кешеләренән һорашып йыйылған мәғлүмәттәрҙән:** Әхмәтбаҡый Фәхретдин улы Аҡъюлов 1857 йылда тыуып, 1936 йылда, 79 йәшендә, донъя ҡуйған. Атаһы уны 14 йәшендә каруанға ултыртып, хаж ҡылырға ебәрә. Бер нисә йылдан егет күп ғилем туплап, әйләнеп ҡайта. Троицкиҙа атаҡлы Зәйнулла Рәсүлиҙә уҡый. Ҡайтҡас, ауыл мәҙрәсәһендә уҡыта. Һуңғараҡ тағы хажға бара. Кешеләрҙе ул төрлө үләндәр менән дә, өшкөрөп тә дауалаған. Бөгөнгө өлкән кешеләрҙең бала саҡ хәтерендә ул изге күңелле ҡарт булып һаҡланып ҡалған.

"Уның өйөнән атлыһы ла, йәйәүлеһе лә, дөйәлеһе лә өҙөлмәне, - тип хәтерләй Үрген ауылында йәшәүсе **Миңлебаныу** инәй **Абдуллина.** - Әхмәтбаҡый олатай менән күрше тигәндәй йәшәнек. Тәбәнәгерәк буйлы, йыуантығыраҡ ҡарт ине ул. Ишек алдарында ҡоҙоҡ бар ине, шунда һыу алырға бара инек. Ҡоҙоҡ артында тағы бер бәләкәй өйҙәре бар ине, килгән-киткән кеше шунда йәшәне. Бик йыраҡтарҙан киләләр ине уға. Үләндәрҙе үҙе лә йыя, кешеләр ҙә йыйып килтерә торғайны. Халыҡ нығ ихтирам итте уны. Уның әйрәткән имдәрен ауылыбыҙ кешеләре һаман ҡуллана. Мәҫәлән, йәш баланың ҡолағы аҡһа, имсәк һөтө тамыҙырға ҡушҡан ул, баш әйләнһә, эремсек һыуы эсегеҙ, тигән. Мин үҙем эремсек һыуын гел эсәм. Бик килешә. Уның әйтеп ҡалдырғандары күп инде ул, тик онотолған. Совет осоронда уның тураһында һөйләргә ҡурҡты бит халыҡ. Үҙе лә, мине бик йыш телгә алмағыҙ, үҙегеҙгә насар булыуы бар, тип әйтеп ҡалдырған үлер алдынан. Менәүәрә исемле ҡатынына, китаптарымды үҙем менән зыяратҡа күмегеҙ, тип әйткән. Ул китаптарҙың яндырылыуын йә теләһә ҡайҙа тұҙырап йөрөүен теләмәгәндер инде..."

Әхмәтбаҡый хәҙрәттең тәүге ике ҡатыны иртә гүр әйәһе була, йәмғеһе дүрт ҡабат никахлана ул. Өсәр бүлмәле ике йорто булған. Тик совет власы уға тынғылыҡ бирмәй. Мал-мөлкәтһеҙ ҡалдырып, үҙен урман ҡырҡырға ебәрә. Ҡартайып, хәлһеҙләнеп һәм ауырыу хәлендә ҡайтып килә ул. Шунан һуң да кешеләрҙе дауалай, әммә бик оҙаҡ йәшәмәй, баҡыйлыҡҡа күсә. Уның үлеме тураһындағы хәбәр йөҙәр саҡрым араларға көнө-сәғәте менән билдәле була. Ул саҡтағы мөғжизәле хәлдә Үрген ауылының бөгөнгө ҡарттары - 80 йәштән өҫтөрә олатай-инәйҙәр бөгөнгөләй хәтерләй. "Күрҙем мин ул яҙыуҙы, - тине Миңлебаныу инәй Абдуллина ла, - ғәрәпсә семәрләнкерәп, ҙур итеп яҙылғайны. Төш ауғас, ҡояш байымаҫ элек булды ул хәл. Оҙаҡ ҡына, бер-ике сәғәт самаһы ғына торғандыр әле ул яҙыу. Һәр хәлдә, минең бала хәтеремдә шулай ҡалған. Мин ул ваҡытта уҡырға төшмәгәйнем әле. Ауылға башҡа яҡтарҙан да бик күп кешеләр килгәйне..."

**Вәли Солтанбаев, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәйҙең мәғариф отличнигы:** "Беҙҙең күршелә мәғариф бүлеге инспекторы йәшәй ине. Беҙ, малайҙар, уның өйөнә патефон тыңларға йыйылғанбыҙ. Бер заман төштән һуң төньяҡтан ҡеүәтле ут өйөрө килеп сығып, ауыл яғына шыуыша башланы. Бишәй урамына еткәс, туҡтап ҡалды. Шул төндә хәҙрәт үлгән булған. Иртәнсәк шундай хәбәр таралды: ут өйөрө рәүешендә хәҙрәттең йәнен алырға килгән булғандар. Өлкәндәр, беҙҙең атай-олатайҙар бик ихтирам итте уны. Тик уны бик телгә алып һөйләп барманылар. Ҡурҡҡандарҙыр инде, замана шундай ине бит. Ҡаҙаҡтар араһында ла абруйы ҙур булған. Йыл һайын килеп, ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләп, ташып биреп, хужалыкта ярҙам итеп китер булғандар".

**Зәйтүнә Абдуллина, мәғариф ветераны:** "1935 йылда мин 6-сы синыфта уҡып йөрөй инем, ауырып киттем. Атайым мине хәҙрәткә алып барҙы. Ул ваҡытта хәҙрәттең донъяһын таптып алғайнылар. Мал өйөндә йәшәй ине. Атайым, ҡыҙым ауырып китте, берәй нәмәң юҡмы, тине. Хәҙер, тип, урындыҡ артынан алып, шыйыҡ дарыу бирҙе. Ҡайтышлай мәктәп директоры осраны. Иртәгә бөтә класс алдында мине баҫтырып әрләр инде, тип бик ҡурҡтым. Директор аҡыллы кеше булғандыр, минә һүҙ әйтеүсе булманы. Хәҙрәт биргән дарыуҙан шундуҡ шәбәйҙем, улай ғына түгел, бына хәҙер 86 йәшкә етеп киләм, Аллаға шөкөр, сырхау-фәләнгә бирешеп бармайым. Хәҙрәттең үлеменә бәйле мөғжизәнең беҙ икенсе төрлөһөн күрҙек. Ул былай булды. Бынан 70 саҡрым алыҫлыҡтағы Абҙан мәктәбендә 7-селә уҡып йөрөйөм. 1936 йылдың йәйе. Эҫе көн, Юлбарыҫ исемле туғаным менән йәйәүләп ауылға ҡайтып киләбеҙ. Арығанбыҙ. Ҡапыл күтәрелеп ҡараһам, күктә яҙыу күреп, туҡтап ҡалдым. "Юлбарыҫ, ҡара әле, күктә яҙыу бар", - тим. Шаҡ ҡаттыҡ. Тик ғәрәпсә хәрефтәр менән яҙылғас, яҙыуҙы уҡый алманыҡ. Ул турала ҡабат һөйләнгән кеше булманы. Ул саҡта инде хәҙрәттең мәсетен колхоздың яслеһенә әйләндергәйнеләр, әсәйемде мөдир итеп ҡуйғайнылар. Бер көндө әсәйем ҡайтты ла, беҙҙең яслеләр тирәһенә дөйәләре менән ҡаҙаҡтар килеп тулды, тине. Күрәһең, күктәге теге хикмәтле яҙыуҙы күреп, өсөнөмө, етеһенәме килеп еткән булғандарҙыр инде..."

Күгәрсен районының Мәксүт ауылында йәшәүсе хеҙмәт ветераны **Фәтхелислам Имелбаев** һөйләгәндәрҙән: "Әхмәтбаҡый хәҙрәт беҙҙең ауылға ла килә торғайны. Бер килгәнендә атайымдан, нишләп малайың йәй көнө йылы кейенеп йөрөй, тине. Мин тапма /малярия/ менән ауырый инем. Шунан хәҙрәт тоҙ өшкөрөп бирҙе. Ике тапҡыр ғына эстем, ауырыу үтте. Һуңынан хәҙрәттең донъя ҡуйғанын ишеттек. Күктә яҙылғайны. Мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Тик уҡый белмәгәс, нәмә яҙылғанын аңғарманым. Был турала Ғиззәтуллин Сафиулла ағайыма барып әйттем. Ул, былай булғас, берәй бик ҙур дин әһеле вафат булған инде, ишетербеҙ әле, тине. Ысынлап та, ике көндән Үрген хәҙрәте үлгән, тигән хәбәрҙе ишеттек".

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө ҡарттар - ғәрәпсә яҙманан ваз кистерелгән совет дәүеренең тәүге балалары. Шуға күрә улар күктә күргән яҙыуҙы уҡый алмаған. Ләкин өлкәндәрҙән ишетеүҙәренсә, "Баҡый хәҙрәт вафат булды" тигән хәбәр яҙылған булған күк битендә.

**Йәғәфәр Аксурин**, Үрген ауылы мәсетенең муллаһы /Әхмәтбаҡый хәҙрәттең нәҫеле/: "Беҙ ул саҡта бәләкәй инек. Бер апай уҡыны ла, хәҙрәт үлгән, тип яҙылған, тип аңлатты. Шуны уҡып, ҡырҙағылар килеп еткән. Дөйәләре менән таш алып килеп, ҡәберенә ҡуйып киткәндәр. Әхмәтбаҡый хәҙрәтте атаһы Фәхретдин хәҙрәт һәм олатаһы эргәһенә күмәләр. Әйткәндәй, ҡәберҙәрҙең барыһы ла бөгөн дә ҡараулы, таш менән буратылған".

Ауылдаштары әйтеүенсә, Әхмәтбаҡый хәҙрәттең өс улы, ике ҡыҙы була. Барыһы ла ғилемгә ынтылышлы, алдынғы ҡарашлы заттар була. Әхмәт исемле улы ғәйепһеҙгә ун йыл Сталин золомоноң асыһын татый, шулай булһа ла, бөгөлмәй, тормошто ярата, балаларына матур тәрбиә биреп ҡалдыра. Бөгөн был затлы нәҫелдә дауам итеүселәрҙең һәммәһе лә илгә тоғро йәндәр, араларында исемдәре билдәле даланлы шәхестәр - фән эшмәкәрҙәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, артистар, уҡытыусылар, табиптар... Әхмәтбаҡый хажиҙың олатаһы Аҡъюлдан таралған башҡа тармаҡтар ҙа үҙҙәренең булмышына хыянат итмәгән көслә тоҡомдан һанала.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ә инде Үрген ауылы халҡына килгәндә, ул үҙенең шәхестәрен ҙурлай, изгеләрен ҡәҙерләй торғандарҙан. Ауылда матур бер йола бар: һәр йылдың 2 майы үргәндәр өсөн әрүәхтарҙы иҫкә алыу көнө булып тора. Был көндә зыяраттар тәртипкә килтерелә, әрүәхтәр рухына аяттар уҡыла. 2005 йылда ауыл халҡы аҡса йыйып, төбәктең ете изге кешеһенә ҡорбан салдырған. Аллаға шөкөр, һәр төрлө афәттәр ауылыбыҙҙы урап үтә, изгеләр рухы беҙҙе һаҡлай, ти үргәндәр. Амин, шулай булһын!**

Әлфиә БАТТАЛОВА.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

* * *

Артабан Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Иблисҡа бер нисә ҡыҫҡа һорау бирҙе.

- Һинең әшнәң кем?
- Проценттар иҫәбенә йәшәүсе.
- Һинең дуҫың кем?
- Зина ҡылыусы.
- Һин кем түшәгендә йоҡлайһың?
- Эскесе ҡатын түшәгендә.
- Ә кемде ҡунаҡҡа алып йөрөйһөң?
- Бурҙы.
- Ә һинең вәкилдәрең кемдәр?
- Сихырсылар.
- Һин бигерәк тә ниҙе яратаһың?
- Ир менән ҡатындың айырылышыуын.
- Кемде нығыраҡ яратаһың?
- Йома намаҙын уҡыуҙан баш тартыусыларҙы.

* * *

Һуңынан Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башҡа темалар буйынса ла һорауҙар бирҙе:

- Эй, ҡәһәрләнгән, һинең кәйефеңде нимә төшөрә?
- Изге яуға китеүсе һуғыш аттарының кешнәүе.
- Ә һинең тәнеңде нимә иретә?
- Гонаһтары өсөн тәүбә итеүсе.
- Ә нимә һинең бауырыңды өҙгөсләй?
- Аллаһы Тәғәлә алдында көнө-төнө ҡылынған тәүбәләр.
- Һинең йөҙөңдө нимә ҡыйшайта?
- Йәшереп бирелгән саҙаҡа.
- Һинең күҙҙәреңде нимә һуҡырайта?
- Төндә ҡылынған намаҙ.
- Ә башыңды түбән эйергә нимә мәжбүр итә?
- Йәмәғәт менән ҡылынған күп намаҙҙар.

* * *

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тағы һорауҙар бирҙе:

- Һиненсә, кем ул иң бәхетле кеше?
- Аңлы рәүештә намаҙ ҡылыуҙан туҡтаған кеше.
- Кем һине башҡаларҙан нығыраҡ бөлдөрә?
- Һаҡсыл кешеләр.
- Ә нимә һине эшеңдән бүлдерә?
- Ғалимдарҙың йыйылышы.
- Әйт әле, һин нисек ашайһың?
- Аҙыҡты бармаҡ остары менән тотоп, һул ҡул менән ашайым.
- Ә ҡайнар ел иҫһә һәм эҫе булғанда һин үҙеңдең нәҫелеңде ҡайҙа йәшерәһең?
- Кешеләрҙең тырнаҡ аҫтына.

* * *

Артабан Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) икенсе темаға күсте. Иблис яуап биреүен дауам итте.

- Һин үҙеңдең Раббыңдан нимә һорайһың?
- Ун әйбер һорайым.
- Ниндәй?
- Бына шундай:

**1)** Мин Раббымдан, Ул миңә кешеләр менән уларҙың малын һәм балаларын бүлеүҙе һорайым... Минең был һорауым ҡәнәғәтләнделе. Һәм был изге аят менән иҫбат ителде:

**"Хәлеңдән килгәнсә уларҙы тауышың менән әүрәт, (...) байлығын, балаларын бергә файҙалан" ("Әл-Исра", 17/64).**

Мин Аллаһ исеме (бисмилләһ) менән һуйылмаған малдарҙың ите һәм процентынан килем килгән һәм тыйылған ризыҡтар менән туҡланам.

Һәм мин шулар менән бергә, алған саҡта Аллаһы Тәғәләгә һыйынмаған (Әғүҙүне әйтмәгән) мөлкәттәр менән файҙаланам

Ә енси яҡынлыҡ ҡылған ваҡытта кем дә булһа Аллаһ һаҡлауына таянмай икән, мин уның ҡатыны менән мөнәсәбәткә инәм... Ә был яҡынлыҡтан тыуған бала беҙҙе тыңлаясаҡ һәм минең бойороғомды үтәйәсәк.

Әгәр кемдер яҡшы ниәт менән түгел, ә гонаһлы ниәт менән һыбай атланһа, мин уның эргәһенә ултырам. Һәм мин уның юлдашы һәм һыбай йөрөгәнендә күршеһе буласаҡмын.

Һәм был аят менән раҫланды. Аллаһ миңә бойорҙо:

**"Хәлеңдән килгәнсә уларҙы тауышың менән әүрәт, уларға ҡаршы атлы-йәйәүле ғәскәрҙәр йый, уларҙың байлығын, балаларын бергә файҙалан, вәғәҙәләр бир. Шайтан, ысынлап та, алдар өсөн генә вәғәҙә бирә!" ("Әл-Исра", 17/ 64).**

**2)** Мин Аллаһы Тәғәләнән: "Миңә йәшәү урыны бир", - тинем. Ул миңә мунсаны тәғәйенләне.

**3)** Мин унан миңә ғибәҙәт итеү урындары биреүен һорайым... Һәм ул һәр баҙарҙа миңә мәсет урындары бирҙе.

**4)** Уҡыу өсөн китап һорайым... Ул миңә шиғырҙар бирҙе.

**5)** Миңә аҙан бир, тинем... Ул миңә йыр бирҙе.

**6)** Мин унан: "Йоҡлағанда иптәш бир", - тинем... Ул миңә эскеселәрҙе һәм наркомандарҙы бирҙе.

**7)** Мин унан ярҙамсылар һорайым, ул миңә кадараттар сектаһын бирҙе.

**8)** Мин унан ҡәрҙәштәр һорайым, ул миңә үҙенең мөлкәтен исраф итеүселәрҙе һәм үҙенең килемен гонаһлы эштәргә тотоноусыларҙы бирҙе. Һәм был аят менән раҫланды:

**"Исраф иткән - шайтан туғаны, ә шайтан Раббының ҡәҙерен белмәй" ("Әл-Исра", 17/27).**

Шул урында Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әгәр һин аяттар менән иҫбат итмәһәң, мин һиңә ышанмаҫ инем", - тине.

Иблис былай тип дауам итте:

**9)** О, Мөхәммәт! Аллаһы Тәғәләнән мин кешеләрҙе күрә алыуымды, ә уларҙың мине күрмәүен һорайым. Минең был теләгем үтәлде.

**10)** Мин кешеләрҙең ҡан тамыры миңә асыҡ булыуын һорайым. Был теләгем дә үтәлде. Һәм хәҙер мин ҡайҙа һәм ҡасан теләйем, уларҙың тәндәре буйынса йөҙәм...

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Цинизмды ыңғай ҡарашҡа алмаштыр

**Тирә-йүндә барған йәки барасаҡ бөтә ваҡиғаларға ҡаршы фекер белдергән, һәр нәмәлә тик етешһеҙлек эҙләгән йәки эргә-тирәләге кешеләрҙең ғәмәлдәрендә иң түбәнсел уйҙарҙы күргән, шикләнеп ҡараған кешеләрҙе аҡыл эйәләре тип иҫәпләүҙәре хайран ҡалдыра. Уларҙың кәмһетеүле ҡараштары нык һиҙгер, ысынбарлыҡҡа тап килә һәм йәмғиәт өсөн файҙалы, тип ҡабул ителә, сөнки улар үҙенә хәүеф янағанды күрәбелә кеүек.**

Оятһыҙлыҡтың тамыры үҙенде контролдә тотоу һәм бойондороҡһоҙлоҡто үҙ эсенә алған яҡшылыҡ ҡына берҙән-бер ҡиммәт, тип иҫәпләгән боронғо грек фәйләсүфтәре мәктәбенә барып тоташа. Улар фекеренсә, яҡшылыҡ - ул әхлаҡи тәртиптең ҡаты стандарты, кинәт тыуған дәрт һәм тойғоларҙан тыйылыуға йүнәлтелгән күнекмәләр ярҙамында дөрөҫтө дөрөҫ булмағандан айыра белеү һәм бөтәндәргә ышанмайынса, уларҙың йогонтоһона бирелмәйенсә йәшәү. Бөгөн беҙ фекер азатлығына, үҙеңде танып белеүгә, ижади һәм интуитив һәләттәрҙе үҫтереүгә, шатлыҡ һәм илһамға, шулай уҡ кешеләр араһында асыҡ һәм ышаныслы үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ҙур әһәмиәт бирергә өйрәндек. Хәҙерге заман циниктары, боронғолар кеүек үк, ғаләм гармонияһы һәм сикһеҙ мәрхәмәтлектән ғибәрәт булған тәбиғи ҡанунды аңламай. Циник ҡояшлы көндә ҡараңғы бүлмәлә ултырып: "Бер ниндәй ҙә яҡтылыҡ күрмәйем, бөтә тирә-яҡ ҡараңғылыҡ", - ти. Яҡшылыҡты ҡабул итергә теләмәйенсә, ул, әлбиттә, уңышһыҙлыҡтарҙан ҡурҡа һәм шул рәүешле уны үҙенә йәлеп итә. Был осраҡта аҡыл түгел, ә идара итеп булмай торған ҡурҡыу, ысынбарлыҡ түгел, ә иллюзия һиңә тәьҫир итеүсе көс булып тора. Һуңғы сиктә был ҡурҡып йәшәүгә килтерә.

Һәм, киреһенсә, оптимист кеше тормошто ыңғай яҡтан күрергә ынтыла һәм барыһы ла яҡшы килеп сығасағына ысын күңелдән ышана. Ғәҙәттә, кем яҡшыны көтә, уның эштәре унай барыуына иғтибар иткәнегеҙ барҙыр? "Кешенең сәләмәт мөнәсәбәте еңеллек хәлендә һәм тынғыһыҙлыҡтарҙан азат булырға тейеш, ә күктән төшәсәк ниндәйҙер кескәй генә уңышты көтөү һағышы түгел", - тип әйткән Эмерсон.

Оптимизм һинең менән бер ваҡытта ла насар хәл булмаясаҡ һәм һәр теләгәнеңә өлгәшәсәкһең, тигәнде аңлатмай. Беҙ барыбыҙ ҙа проблемаларға юлығабыҙ, әммә оптимистар һәр хәл-ваҡиғанан да сығыу юлы барлығын белә. Ниндәй ҙә булһа ҡыйынлыҡ килеп тыуғанда, оптимист ҡаушау, ҡурҡыу йәки ауыртыу тойоуын йәшермәй, әммә уның ыңғай тамамланыуына ышана.

Эмерсон кеүек бер кем дә оптимизм тураһында ялҡынлы һәм йөрәккә үтеп инерлек итеп яҙа алмаған. Ул быны ҡаты сирҙән, унан тәүге ҡатыны, ике ағаһы һәм яратҡан алты йәшлек улы үлгәндән һуң яҙған. Бөтәндәрҙе былдай трагедия ҡаты күнелле һәм әхлаҡһыҙ итер ине, әммә Эмерсондың тормошҡа ҡарата һөйөүе үҙенең юғары инаныҫынан бер аҙымға ла тайпылырға юл ҡуймаған. Һин дә Эмерсон атаған "иң яҡшыһы ысынбарлыҡ булып тороуын аңларға ярҙам иткән хаталанмай торған ышаныс һәм күренеш"те күңелеңдә йөртөү алаһың. "Былдай ҡарашҡа таяныр, - тигән ул, - үҙеңдәге теләһә ниндәй ышикләнеүҙәрҙе һәм ҡурҡыуҙы ҡыуа һәм тормоштағы төрлө башватҡыстарға ла яуап табасағыңа ышана аласаҡһың"

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БЫЛ - ГОНАҺ!



# ЗИНА ҠЫЛЫУ

Ҡөрьән-Кәримдең "Исра" сүрәһенең 32-се аятында былай тип әйтелә: "Зинаға яҡын килмәгеҙ, был - бысраҡлыҡ һәм боҙоҡ юл!"

Тағы шундай аят бар: "Зина ҡылған ҡатындың һәм зина ҡылған ирҙең һәр береһенә йөҙәр ҡамсы һуғығыҙ, әгәр һеҙ Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә ышана торған булһағыҙ, Аллаһың динендә уларҙы ҡыҙғанмағыҙ. Һәм уларҙы яза ҡылған ваҡытта иман килтергән кешеләрҙән бер төркөм шунда ҡарап торһон" ("Нур", 2).

Бер ваҡыт Аллаһ илсеһенән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөйөк гонаһтар тураһында һорағандар. Ул: "Һине яралтҡан Аллаһҡа тиңдәшлек ҡуйыу", - тигән. "Ә унан һуң?" - тип һорағандар. "Тамағын ҡарай алмаҫмын, тип ҡурҡып, үҙеңдең баланды үлтереү". "Ә унан һуң?" - тип һорағандар. "Күршеңдең ҡатыны менән зина ҡылыу", - тип яуап биргән.

Икенсе бер хәҙистә Аллаһ илсеһе: "Әгәр мосолман зина ҡыла икән, ул быны кафыр булараҡ башҡара. Әгәр мосолман урлаша икән, ул быны кафыр булараҡ башҡара. Әгәр мосолман шарап эсә икән, ул быны кафыр булараҡ башҡара", - тиғән.

Тағы ла бер хәҙистә Аллаһ илсеһенең былай тип әйткәне еткерелә: "Мосолман зина ҡыла икән, ул иманынан яҙа һәм был гонаһы уның өҫтөнә шәүлә булып ята".

"Өс төркөм кешеләр барҙыр, улар менән Аллаһы Тәғәлә ҡиәмәт көнөндә һөйләшмәйәсәк, уларға ҡарамаясаҡ һәм гонаһтарын ғәфү итмәйәсәк:

- Зинасы ҡарт;
- Алдаҡсы имам;
- Тәкәббер ярлы".

"Аллаһы Тәғәлә дүрт төркөм кешегә асыуы. Улар:

- Ант итә-итә һатыу итеүсе;
- Зинасы ҡарт;
- Золом итеүсе имам;
- Тәкәббер ярлы".



## 12 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 100-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Брак по завещанию", 1-я серия. Мелодрама
22.30 "Великая война". К 65-й годовщине Победы в Великой Отечественной войне. "Блокада Ленинграда"
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Солярис"
03.00 Новости
03.30 "Патруль времени: Берлинское решение"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 04.00 "Отряд космических дворняг"
10.00 "Срочно в номер"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер". Сериал
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 39-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 30-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Анжелика", 1-я и 2-я серии. Сериал
22.50 "Сонька золотая ручка", 1-я серия. Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Мой серебряный шар"
01.00 "Честный детектив"
01.40 "Пурпурные сердца". Мелодрама

### НТВ
06.10 "Таксистка-2". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Кодекс чести". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Футбольная ночь"
01.50 "Пурпурный дождь". Мелодрама
04.30 "Проклятье мертвого озера". Триллер

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Погода"**
**10.05 "Полезные новости"**
**10.10 "Виктория". Сериал**
**11.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.50 Мультфильм**
**13.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**17.05 Мультфильм**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Сокращая расстояния". г. Казань**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Лица времени"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 13 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 101-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Брак по завещанию", 2-я серия. Сериал
22.30 "Кровавое воскресенье майора Евсюкова"
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "План на игру"
03.00 Новости
03.20 "Взломщики"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00"Срочно в номер"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Ефросинья", 40-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 31-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Анжелика", 3-я и 4-я серии
22.50 "Сонька золотая ручка", 2-я серия. Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Генерал звездных войн"
01.00 "Родные и близкие"
03.05 "Горячая десятка"
04.10 "Девушка - сплетница"

### НТВ
06.00 "Таксистка-2". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Кодекс чести". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Главный герой представляет"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "Возвращение к озеру смерти". Триллер
02.45 "Жуки". Фантастика
04.20 "К чертовой матери". Боевик

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.20 "Шаг к себе". З. Шипанова**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 "Тропинки жизни". Н. Ирсаева**
**16.00 "Родные напевы"**
**17.00 Мультфильм**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Байман"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Точка зрения"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 14 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 102-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Брак по завещанию", 3-я серия
22.30 "Среда обитания". Док. фильм
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.00 "Поворот судьбы"
03.00 Новости
03.05 "Игровая площадка: возвращение домой"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Великие комбинаторы"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Ефросинья", 41-я серия
18.30 "Дворик", 32-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Анжелика", 5-я и 6-я серии
22.50 "Сонька золотая ручка", 3-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
01.00 "Иваново детство". Драма
03.05 "Девушка - сплетница"

### НТВ
06.00 "Таксистка-2"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Ментовские войны". Сериал
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Омут". Триллер
02.20 "Нелюди". Фантастика
04.05 "Особо опасен!"
04.40 "Тарзан в опасности"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.10 Мультфильм**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык". Республиканский конкурс любителей башкирского танца**
**16.05 "Голоса молодых". IV Республиканский литературный фестиваль**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Учим башкирский язык"**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Курултай"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**23.45 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 15 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 103-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Брак по завещанию", 4-я серия. Сериал
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "Судите сами"
01.10 "У каждого своя ложь"
02.40, 03.05 "Короли Догтауна"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Ефросинья", 42-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 33-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Анжелика", 4-я серия
22.50 "Алла Пугачева. Мужчины ее Величества". Док. фильм
23.50 "Вести+"
00.10 "Тиски". Криминальная драма
02.55 "Девушка - сплетница"

### НТВ
06.00 "Таксистка-2". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
19.30 "Кодекс чести". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Чистильщик". Триллер
01.20 "Сердце - одинокий охотник"
03.45 "Особо опасен!"
04.20 "Жар города"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.3э "Сказка в саду"**
**16.50 "Наш дом - Башкортостан"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Узоры Демских долин"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Крестьянский двор"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Атайсал"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 16 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 213-я серия
16.20 "Спальный район", 104-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Минута славы"
23.40 "Гордон Кихот"
00.40 "Слепая ярость". Боевик
02.20 "Дар"
04.20 "По следу урагана"
05.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.20, 04.25 "Мой серебряный шар"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 43-я серия
18.30 "Дворик", 34-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сны о любви". Юбилейный концерт Аллы Пугачевой
23.40 "Двое под дождем". Мелодрама
01.30 "Обман". Драма
03.0 "Девушка - сплетница"

### НТВ
06.00 "Таксистка-3"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие"
20.55 "НТВишники"
22.05 "Суперстар" представляет". "Жанна Агузарова. Последний концерт на земле"
00.00 "Женский взгляд"
00.50 "В пролете". Комедия
02.55 "Перебежчик"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.40 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.55 "Сказка в саду"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Йома"**
**18.20 "Народные мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Сельский час"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 17 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Убийство свидетеля"
06.00 Новости
06.10 "Испытание верности"
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная"
12.20 "Грядка"
13.00 "Музыка жизни"
14.00 "Татьяна Навка. Лед и пламя"
15.00 "Живой мир. "Жизнь"
16.00 Футбол. Чемпионат россии. VI тур. ЦСКА - "Локомотив". Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами)
18.00 "Кто хочет стать миллионером?"
19.00 "Феличита"
21.00 "Время"
21.15 "Жестокие игры"
22.50 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.30 "Остаться в живых". Сериал
01.30 "Порок на экспорт"
03.20 "Кабинетный гарнитур"
05.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.30 "Без права на ошибку"
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 Мультфильмы
10.35 "Россия против Гитлера. Непокоренный рубеж"
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Освободители". "Разведчики"
15.25 "Подари себе жизнь"
15.55 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
16.50 "Ты и я"
17.55 "Субботний вечер"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Третьего не дано". Военная драма
00.00 "Лицензия на брак". Комедия
01.50 "Игра в смерть". Боевик
03.45 "Глаза ужаса"

### НТВ
05.05 "Легион супергероев"
05.50 "Теория большого взрыва". Сериал
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "В поисках Франции"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Суд присяжных: главное дело"
17.50 "Очная ставка"
18.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50" Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео". "Разрушитель". Боевик
01.00 "Добро пожаловать домой, Роско Дженкинс". Комедия
03.10 "Провинциалы". Комедия

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.50 Погода**
**08.55 Мультфильм**
**10.20 "Советы садоводам"**
**10.20 "Волшебный курай"**
**10.40 Н. Асанбаев. "Израненная судьба". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**13.30 "Родник души - Яншишма". 80 лет детской газете**
**13.30 "Галерея изящных искусств"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40, 19.20 "Дарю песню"**
**15.50 Мультсериал**
**16.20 "Позитив"**
**16.45 "Поющая моя Республика". Концерт НОНИ РБ**
**17.50 "КВН-2010"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**20.20 "Сэнгелдэк"**
**20.40 "Сокращая расстояния". г. Самара**
**21.10 "Вестник "Газпромтрансгаз Уфа"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Призвание - учитель". Концерт**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 18 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Если можешь, прости..."
07.40 "Армейский магазин"
08.20 Дисней-клуб: "Кряк-бригада", "Клуб Микки Мауса"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.10 "Фазенда"
12.50 "Севастопольские рассказы. "Мятежный флот"
13.40 "Минута славы"
16.00 "Великий полководец Георгий Жуков". Документально-художественный фильм
18.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Красавчик". Комедия
00.40 "Вспомни, что будет", 15-я серия
01.30 "Пророк". Триллер

### РОССИЯ 1
05.45 "Найти и обезвредить". Боевик
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.40 "Утренняя почта"
09.10 "Баранкин, будь человеком!"
09.35 "Приключения желтого чемоданчика". Сказка
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.15 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль"
14.25 "Веселые ребята. Дунаевские"
15.10 "Вести. Дежурная часть"
15.40 "Честный детектив"
16.15 "Смеяться разрешается"
17.50 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Полынь - трава окаянная". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Пять неизвестных". Триллер

### НТВ
05.05 "Легион супергероев-2"
05.50 "Теория большого взрыва"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.55 "Спасатели"
11.30 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.20 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Говорит и показывает Пугачева"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Грязная работа". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.35 "Роковой день"
01.10 "Молодые и опасные-4". Боевик
03.25 "Особо опасен!"
04.05 "Сверкающие седла"

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Артылыш"**
**13.00 "Байык". Республиканский конкурс любителей башкирского танца**
**13.50 "Дарю песню"**
**14.50 "Книжный дом"**
**15.10 Мультсериал**
**15.35 "Салям". Воскресный выпуск**
**15.50 "Дорога к храму"**
**16.10 "Династии"**
**16.50 "С песней навека". Концерт группы "Каравансарай"**
**18.10 "Пером и оружием"**
**18.35 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**19.10 "Дарю песню!"**
**20.10 "Уральский самородок"**
**20.45 "В центре внимания"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.45 Погода**
**22.50 "Вечер.сом"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...

# ӨҪТӘЛЕМДӘГЕ ТОҘ ҺАУЫТЫ...

## өҙә үҙәккәйемде



**Һуғыш, ул күрһәткән яралар, күҙ йәштәре, ауыр эштәр тураһында күп яҙырға була, яҙасаҡтар әле. Һуғыш йылдары һәм Бөйөк Еңеү көнө менән аралар алыҫлашҡан һайын, ябай ғына әйберҙәр, һүҙҙәр, күренештәр йөрәк яраларын, юғалтыу һағыштарын хәтерләтеп кенә тора.**

Беҙҙән өҫтәлдә һуғыштан бер йыл алда ғына Бөрйән районында уҡытыусы булып эшләгән Монасипов Минап ағайыма барғанда урмансылар кибетенән атайым алып ҡайтҡан йәйпе тоҙ һауыты ултыра. Ул беҙҙең менән инде 70 йыл бергә "йәшәй". "Йәшәй" генәме, атайымды, һуғыш мәлендәге ауыл, мәктәп, колхоз тормошон, "ҡара ҡағыҙҙарҙы" иҫләтеп кенә тора ул, йөрәкте өтә.

Үҙемә иң мөһим күренгән хәтирәләремде генә яҙам. Күңелгә иң ныҡ уйылып ҡалған көн - 9 май. Сағыу ҡояш, йәшел тәбиғәт, репродуктор гөрләй, мәктәп ихатаһында уҡыусылар гөж килә, уйнай. Ҡапыл һыңар аяғын һуғышта юғалтҡан мәктәп директоры Әхмәт ағай ҡултыҡ таяҡтарында алдыбыҙға килеп сыҡты, илай, һуғыш бөткән, тип һөрәнләй. Шунда йыйылған бөтә халыҡ шатлана-көлә һәм илай башланы. Илайҙар ҙа, ура ҡысҡыралар. Ул илау күренештәре әле лә күҙ алдымдан китмәй.

Уҡытыусылар етәкселегендә фронтҡа аҙыҡ, кейем йыйып оҙатыу, баҫыуҙа ҡар тотоу, көл сығарыу, башаҡ сүпләү, өй беренсә таҙалыҡ тикшереп йөрөү, йәйгеһен мәктәпкә утын әҙерләү, яугир ғаиләләренә тимурсылар ярҙамын ойоштороу, аптекаға йүкә сәскәһе тапшырыу, сусҡа, һарыҡ фермаларына кесерткән, япраҡ аҙыҡ бәйләү уҡыусылар тарафынан башҡарылды. Бер кем зарланманы: тиҙерәк һуғыш ҡына бөтһөн!

Иң ҡыйын көн - "ҡара ҡағыҙ" килгән көн ине. Ҡырҡтан ашыу ғаиләгә килде ул "ҡағыҙ". Кешеләрҙең берҙәмлеге, татыулығы, ярҙамсыллығы берәүгә лә бөгөлөп төшөргә бирмәне.

Бик ауыр саҡтарҙа өләсәйемдәр: "Сабыр итәйек, түҙәйек, Ағиҙелдең балығы, Хоҙай биргән ашар үләндәр күп, картуф бар. Һуғыш та бөтөр, беҙҙең өҫкә буля (пуля тип әйтә белмәне) яумай, ана һуғыш аҫтындағылар ни хәл итә?" - тип беҙҙе йыуата, ә үҙҙәре илай ине.

Колхоз менән мәктәп балаларҙы аҫыҡтырмау өсөн бөтә көсөн һалды. Апрель башында, колхоз биргән үгеҙҙе һуйып, мәктәптә бөтә балалар өсөн итле аш әҙерләнә, һынау биргән көндә ҙур-ҙур түңәрәк икмәк, бал бүленә ине. Колхоз рәйесе һәр саҡ: "Беҙгә киләсәктә эшсе ҡулдар күп кәрәгер, тырышып уҡығыҙ", - ти торғайны. Был һүҙҙәр әле лә ҡолағымда яңғырай. Етәкселәрҙең алдан күреүе, халыҡты ҡайғыртыуы арҡаһында астан шешенеүсе, үлеүсе булманы.

Һуғыш бөттө, ауыр эштән йонсоған көндәр кәмене, күҙ йәштәре кипте, ҡара һағыш йөрәк эсенә бикләнде, тик етемлек - әсәйҙәрҙең ирһеҙ, өләсәйҙәрҙең улһыҙ, балаларҙың атайһыҙ, һылыу ҡыҙҙарҙың ирһеҙ ҡалыуы ғына ғүмерлеккә, быуындан-быуынға һөйләргә генә ҡалды.

Ә өҫтәлдә тоҙ һауыты,
Атайым төҫө бит ул.
Һуғыш һалған һағыштарҙы,
Иҫләтеп тора бит ул.
Именлекте һаҡлағыҙ, тип
Иҫкәртеп тора бит ул.

Һаман шул һауытҡа ҡарап, һағышланмайым әле, тип, уны Стәрлелә йәшәгән өлкән улыма бирҙем, һауытҡа, һуғышҡа бәйле хәтирәләрҙе хәҙер ул дауам итә. Быуаттар үтер, һуғыш яфаларын һөйләү дауам итер, сөнки һәр ғаиләнең үҙ тоҙ һауыты бар бит.

Ҡара ҡайғы килтергән һуғыштарҙы, "ҡара ҡағыҙ" алып илаған ғаиләләрҙе, атайһыҙ үҫкән сабыйҙарҙы: "Атай кем ул?" - тип һорауҙарын ҡабат күрергә, кисерергә яҙмаһын.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА,**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ

# ҠЫУАТОВТАР ДАНЫН...

## мин дә күтәрергә тейеш




**"Булыр илдең балаһы бер-беренә батыр, тиер, бөлөр илдең балаһы бер-беренә бахыр, тиер" тигән мәҡәл мине ныҡ уйландырҙы. Тимәк, тәртипле, аҡыллы, матур итеп йәшәйем, тип ғорурланырға түгел, ә үҙең янындағы кешеләрҙе күреп, уларҙың яҡшы гәҙәттәре, матур холоҡтары, күркәм тормоштары өсөн шатланып, уларҙы маҡтап, ҙурлап йәшәргә кәрәк.**

Яңыраҡ бер хикәйәт уҡығайным: Бер аҡыл эйәһе сәйәхәт иткәндә бер кешене осратҡан. Ҡара тиргә, йән ахмалға төшөп эшләгән кешенән: "Ни эш менән мәшғүлһең?", - тип һораған. "Күрмәйһеңме ни, таш ватам, эше ауыр, ашы юҡ, михнәттең михнәте", - тигән тегә кеше. Күпмелер юл үткәндән һуң, аҡыл эйәһе тағы эш менән мәшғүл бер кешене осратҡан. "Ни эш атҡараһың?" - тип һораған унан аҡһаҡал. "Таштан күпер һалам. Ике ярҙы, ике юл осон тоташтырам", - тип ғорур яуап биргән эшсе. Артабан таш менән эшләүсе тағы бер кешене осратҡан аҡһаҡал һәм унан да нимә эшләүен һораған. "Был таштан аҫыл һарайҙар һалам", - тигән күңелле таууш менән ташсы. Яратып эшләгән эш күңелгә ял, дәрт бирә шул.

Мин үҙем дә тырыш, кешеләргә яҡшылыҡ эшләргә ынтылып йәшәүсе Ҡыуатовтар нәҫеленәнмен. Шәжәрәбеҙ Ҡыуат старшинанан башлана. Уның улы Буранғол кантон, уның улы Таһир кантон, унан Әхмәт кантон, уның улы Әлмөхәмәт кантон булған. Халҡыбыҙ өсөн күп эш башҡарған улар, ирек яулау өсөн ихтилалдарҙа ҡатнашҡандар, ерҙе һаҡлап көрәшкә күтәрелгәндәр. Үҙҙәре уҡымышлы, уңған булған. Буранғол менән Ҡаһарман кантон 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Буранғол кантон "Парижды алған өсөн", "1812-1814 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлеге итеп" миҙалдары менән бүләкләнгән. Уның тураһында йыр ҙа сығырғандар:

Таҫма ла ғына таҫма, ай, аҡ уҡа,
Буранғол да майор ягаһы.
Кантон ғынамы ни, командир ҙа,
Яу батыры - илдең ағаһы.

Олатайҙарым дворян ғына булып йәшәмәгән, халыҡ менән бөтә ауырлыҡтарҙы ла кисергән. Ҡыуатов Ғүмәр хирург була, бөгөн Республика клиник дауаханаһы уның исемен йөрөтә. Сәнғәт әһелдәре лә, уҡытыусылар ҙа, ғалимдар ҙа, хәрбиҙәр ҙә бар Ҡыуатовтар нәҫелендә. Мин үҙем дә атай-әсәйем, нәҫелем йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ өсөн Ейәнсура башҡорт гимназияһында тик яҡшы билдәләргә генә уҡып йөрөйөм. Атайым, намыҫлы хеҙмәт, изге күңел тормошта иң мөһиме, тип өйрәтә беҙҙе. Ҡыуатовтарҙың шәжәрәһе лә беҙҙең йортта һаҡлана.

Ейәнсурала халыҡ эшсән, алсаҡ, йыр-моң ярата һәм мотлаҡ үҙенең нәҫеле менән ғорурланып йәшәй. Артабан да шулай бер-беребеҙгә терәк булып, бер-беребеҙҙе күтәреп йәшәргә тейешбеҙ, тип уйлайым. Ә арала бахырҙар бар икән, уларға ярҙам итергә, уларҙы тәрбиәләргә тейешбеҙҙер. Шунда ғына илебеҙ алға китер, уның киләсәге яҡты булыр.

**Ләйсән ҠЫУАТОВА.**
**Ейәнсура башҡорт гимназияһы уҡыусыһы.**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ишембай ҡалаһында йәшәүсе һеңлебеҙ **Гөлнара Әхтәм ҡыҙы Төхвәтуллинаны** тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ. Хоҙай һиңә бәхетен дә, шатлыҡтарын да мул итеп умырып бирһен, изгелектәр генә оҙата барһын ғүмер юлдарында. Һау-сәләмәт бул!

**Ҡотлау һәм изге теләктәр менән, апайҙарың Фәниә, Гөлфиә.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12-13 апрелдә** театр коллективы Р.Вальсерҙың **"Сабырҙар һәм сәйерҙәр"** спектакле менән Екатеринбургта Францияның Рәсәйҙәге вәкиллеге тарафынан үткәрелгән бөгөнгө француз драматургияһы лабораторияһында ҡатнашасаҡ. Бында башҡорт театры менән бер рәттән, Свердловск академия драма театры, Каменск-Уральск ҡалаһының "13-сө һанлы драма" театры, Екатеринбург ҡалаһының "Коляда", "Волхонка" театрҙары сығыш яһаясаҡ. Унан ҡайтҡас, театр иждадсылары Санкт-Петербург ҡалаһына, ә май айында Стамбулға юл тотасаҡ.

**11 апрелдә** М.Ғиләжевтың **"Һөйөм, һағынам..."** комедияһы.

**13 апрелдә** Р.Шарттың **"Ҡатынымдың исеме Морис"** комедияһы.

**14 апрелдә** Н.Асанбаев әҫәре буйынса **"Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** спектакле.

**15 апрелдә** Т.Миңнуллиндың **"Мулла"** драматик хикәйәһе.

**16 апрелдә** Н.Ғәйетбаевтың **"Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** комедияһы.

**17 апрелдә** Кен Кизиҙың **"Кәкүк ояһы"** психологик триллеры.

**Бәләкәй сәхнә**

**17 апрелдә** З.Биишева әҫәре буйынса **"Серле көршәк"** хикәйәте

**КЕМ АЛЫҠ?**

**Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе ике кеше театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**1.** "Яратыу гонаһмы?" спектаклендә төп ролде кемдәр башҡара?

**2.** "Шәүрәкәй" спектаклендә Руслан Хайсаров менән Гөлсәсәк Фазлаева башҡарған персонаждарҙың исемдәре?

**Яуаптар 8-937-3419192 телефон һандары буйынса шаршамбы көнө ҡабул ителәсәк.**

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 апрелдә** 11.00 сәғәттә И.Вәлиевандың **"Мөхәббәт китабы"** драматик әкиәте.

**16 апрелдә** 19.00 сәғәттә А.Володиндың **"Биш кистә - бер ғүмер"** драмаһы.

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 апрелдә** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Миңзифа Иҫҡужина "Һаумы, тыуған яғым!"** исемле концертына саҡыра. Йырмоң кисәһендә Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Тимеров, Альберт Салауатов, Марсель Ҡотоев, Гөлгөнә һәм Рәил Лоҡмановтар ҡатнашасаҡ.

Совет районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты Өфө ҡала округы Мәғариф идаралығы янындағы Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк методисы **Лилиә Халирахман ҡыҙы Хәкимованың әсәһе** вафаты сәбәпле, ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән Әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "ХАЗИНА" ПОЭМАҺЫ...

## шиғри театрға нигеҙ һалды



**"Нефтселәр" мәҙәниәт һарайына был юлы халыҡ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың "Хазина" поэмаһы буйынса ҡуйылған театрлаштырылған тамаша ҡарарға йыйылды. Шағирҙың был шиғри әҫәрен "Киске Өфө" гәзитендә, "Ағиҙел" журналында уҡып, халыҡ бер тетрәнгәйне инде. Әле килеп шағир һүҙе сәхнәлә һәм йәш таланттар тарафынан яңғыратылғас, ул тағы ла юғарыраҡ кимәлдә көслө тулҡын булып, һәр тамашасы йөрәгенә үтеп инеп, хис-тойғо ҡойонона сорнаны. Был поэманың шундай юғары кимәлдә яңғыраш таба алыуында, әлбиттә, режиссер хеҙмәтенең дә өлөшө ҙур. Тап шуға ла поэманы сәхнәгә ҡуйыусы режиссер Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, профессор Таңсулпан БАБИЧЕВАҒА уңышлы ижад эше хаҡында һөйләп биреүен һорап мөрәжәғәт иттек:**

- Уйламағанда тотондом был поэмаға. Рауил ағай үҙе был шиғри әҫәрҙе сәхнәләштереп булмаҫмы, тип мөрәжәғәт иткәс, поэманы уҡып сығып, бер яҡтан, ныҡ тетрәндем, икенсе яҡтан, уны нисегерәк һәм кемдәр менән сәхнәләштерергә, тигән уйға ла ҡалдым. Былтыр ғына минең Өфө дәүләт сәнғәт академияһында уҡыған башҡорт төркөмөм курсты тамамлап, Милли йәштәр театрына эшкә киткәйне. Әлеге студенттарым бары тик 1-се курста ғына уҡып йөрөгәнлектән, бындай әҫәрҙе тулыһынса башҡарып сыға алырҙарына ышаныс та юҡ ине. Әммә Рауил ағайҙың һорауын бер нисек тә кире ҡаҡҡым килмәне һәм ике төркөмдө лә йыйып алып, тәүәккәлләнек. Ун егет һәм ике ҡыҙ менән февраль урталарында әҫәрҙе сәхнәгә сығарыу эшенә тотондоҡ. Әлбиттә, 1-се курстағыларға ауыр ҙа булғандыр, сөнки был шиғыр ятлау ғына түгел, ә автор тәрәнлегендә һәм киңлегендә фекер йөрөтөү, шуны тамашасы күңеленә алып барып еткерерлек итеп башҡарыу талап итела ине. Үҙ өҫтәрендә оҙаҡ эшләне йәштәр. Сәхнә теле уҡытыусыһы Земфира Хәмзә ҡыҙы Хөсәйенова бик ныҡ ярҙам итте. Беҙ 1-се курстар менән өс-дүрт йылда эшләй торған эште ай ярымда атҡарып сыҡтыҡ. Шағирҙың был әҫәре уларҙы ла бик ныҡ тетрәндерҙе. Поэма өҫтөндә эшләгәндә улар бер башҡа юғары үҫте, тәжрибә тупланы, тип әйтергә була. Милли йәштәр театры актерҙарының студенттарға һәр яҡтан өлгө булып, бер-береһенә ярҙамлашып, берҙәм эшләүҙәре әҫәрҙе тулы ҡанлы итеп башҡарырға булышлыҡ итте.

"Был театр артабан эшен дауам итәсәкме?" - тигән һорау бирәләр хәҙер беҙгә. Беҙҙең академияны тамамлап сыҡҡан курс менән үҙебеҙҙең уйнаған спектаклдәребеҙҙе һаҡлап, театр булып ойошоп, артабан да әҫәрҙәр сәхнәләштереүҙе дауам итергә, тигән хыял бар ине. "Замандаш" тигән исем дә уйлап ҡуйғайныҡ. Был шиғри театрҙы тыуҙырырға Рауил Бикбаевтың әлеге "Хазина" поэмаһы булышлыҡ итте лә инде. Шуға был кисә беҙҙең өсөн дә, шағир өсөн дә тарихи көн булды. Шағир һүҙен китаптан, йә булмаһа, гәзит-журналдан уҡыу - бер, ә уны сәхнәнән төрлө төҫтәге буяуҙар аша ҡабул итеү күпкә тәрәнерәк тойғолар кисерергә мәжбүр итә. Шуға ла был поэма сәхнә аша яңғырап, икенсе һулыш кисерҙе, тип әйтергә була. Бөгөн Республика йылы, III Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан был әҫәрҙең сәхнәнән яңғырауы бик ҙур әһәмиәткә эйә. Бигерәк тә алдыбыҙҙа торған Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы алдынан халыҡты уйға һалыу, уятыу, үҙ асылына ҡайтарыу йәһәтенән дә мөһим сара булып торасаҡ ул. Беҙ был йүнәлештә эште артабан да дауам итергә әҙербеҙ. Тик беҙгә Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы яғынан да, Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты яғынан да ярҙам кәрәк буласаҡ. Башҡорт милли театр сәнғәте шиғри театрға яҡын, сөнки элек-электән төрлө эпостар ҙа йырҙан килеп тыуған, шиғри юлдар менән яҙылған, сәсәндәр сығыш яһаған. Тап шуға ла беҙҙә тик поэзия әҫәре менән генә эшләгән юғары рухлы театр булырға тейеш, минеңсә. Ул ҡайҙа, кем ҡанаты аҫтында урынлашасаҡ, быныһы тураһында уйларға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең халыҡ һәр ваҡыт сәсән һүҙен, аҡһаҡалдар кәңәшен тотоп йәшәгән, шунан сығып эш иткән. Бөгөн халыҡ тап ошондай анды уятыусы, милли рухты күтәреүсе шағир һүҙенә һыуһағанда әлеге поэма үҙ мәлендә яңғыраш тапты. Уны бөгөн баш ҡалабыҙ сәхнәләрендә генә түгел, ә ауыл халҡына ла еткереү мәсьәләһен хәл итергә кәрәк.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Алма менән сөгөлдөр иҙмәһе

Бешкән сөгөлдөр менән әрселгән алманы ҡырғыстан үткәргәс, май, шәкәр ҡомо, ҡаймаҡлы соус ҡушып болғатып, 8-10 минут быҡтырырға. Өҫтәлгә был иҙмәне өҫтөнә әҙ генә үҫемлек майы һибеп бирергә.

### Ҡаймаҡ соусы

Табаны утҡа ҡуйғас, 2-3 ҡалаҡ он һалып, бер стакан һыуҙы бүлеп-бүлеп ҡойоп болғатып, ярты стакан ҡуйы ҡаймаҡ, 40 г аҡ май, тәмenә ҡарап тоҙ һалып болғатып тороп, 5-7 минут ҡайнатып алырға (ҡаймаҡ шыйыҡ булһа, һыу әҙерәк алына һәм кирееһенсә).

### Кәбеҫтә менән картуфтан кәтлиттәр

Кәбеҫтәне турап, тоҙламай ҡурып алырға ла, әрсемәй бешерелгән картуфты таҙартып, башлы һуғанды турап, барыһын да ит турағыстан үткәргәс, йомортҡа ҡушып, тоҙлап, кәтлиттәр әүәләргә. Сохари онтағында аунатып алғас, майлы табала бешереп алырға.

### Иң тәмле борщ

Итте бешереп алғас, һурпаны һөҙөргә лә кире утҡа ҡуйырға. Ике уртаса ҡыҙыл сөгөлдөрҙө турап, 10 минут ҡайнатҡас, туралған кәбеҫтә, 1-2 туралған кишер ҡушҡас, тағы 10 минут ҡайнатырға. 4-5 картуфты турап һалғас, әҙер булғансы бешерергә. Бешер алдынан ғына һуған, лавр япрағы һалырға, 5-6 иҙелгән һарымһаҡты аштың аҫтындағы утты һүндергәс һалып болғатырға.

### Аҡ шалҡан менән алма

300 грамм тирәһе аҡ шалҡанды ваҡ ҡына итеп турап, май ҡушып быҡтырырға. Шул хәтлем үк күләмдә туралған алма, 20 г йөҙөм, 10 г шәкәр ҡомо, тоҙ һалып, йомшарғансы тоторға. Шалҡанды быҡтырырға 2 ҡалаҡ аҡ май етә. Был ике кеше өсөн.

Аҡ шалҡанда яман шешкә ҡаршы көслө матдәләр бар, уны шул көйө һәм салаттарға ҡушып ашау бик файҙалы.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БАЙЛЫҠТЫ ҺАҠЛАП ҠАЛТЫРАНҒАНСЫ...

## фәҡир булыуың мең артыҡ

Яҡшы бала яман атаның ишектәге башын түргә һалыр, яман бала яҡшы атаның түрҙәге башын ишеккә һалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балалыҡ һәм үҫмер йылдарында үҙ теләктәрен ҡандыртыу менән генә булған йәш кеше йылдар үтеү менән күңел бушлығына юлығыр.

**(В. Сухомлинский).**

Кеше бәхетһеҙ икән, быға ул үҙе генә ғәйепле. Булдыра алмағанды булдырырға теләгәндәр - бәхетһеҙ, булдыра алғанды теләгәндәр - бәхетле.

**(Эпиктет).**

Байлыҡты арттырыу һәм һаҡлау хәстәрлеге менән йәшәгәнсе, фәҡир булыуың мең артыҡ.

**(Федр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Арыҫлан балаһы инә арыҫлан үлгәс, кәзәләр араһына килеп юлыға һәм улар тәрбиәһендә үҫә. Әлбиттә, кәзәләр араһында үҫкән, улар тарафынан тәрбиәләнгән арыҫлан үҙен шулай уҡ кәзә тип хис итә. Ул кәзәләр шикелле үк вегетариан була һәм тик үлән менән генә туҡлана, улар һымаҡ уҡ мыҡрыҡлай. Берҙән-бер көндө кәзәләр көтөүе эргәһенә ҡарт арыҫлан килә һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай тора. Кәзәләр араһында йәш арыҫлан йәшәй. Кәзәләр уның арыҫлан икәне тураһында уйлап та бирмәй һәм унан ҡурҡмай ҙа. Ә бына ҡарт арыҫланды күргәс, улар төрлөһө төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса. Йәш арыҫлан да ҡасырға уҡтала, тик уны ҡарт арыҫлан тотоп ала ла, күл янына алып бара һәм уны көҙгөләй ялтырап ятҡан һыу өҫтөндәге сағылышына ҡарарға мәжбүр итә. Шунда йәш арыҫлан үҙенең ҡарт арыҫлан һымаҡ уҡ ҡиәфәттә икәнен күрә. Ҡурҡыуы һәм күҙ йәштәре үтә, башындағы кәзә һыны аҡрынлап юғала башлай. Хәҙер инде ул үҙенең кәзә түгеллегенә ышана, әммә арыҫлан икәненә лә ышанып етмәй. Теҙ быуындары ҡалтырау дауам итә. Ҡарт арыҫлан уны үҙенең өңөнә алып килә. Аҡрынлап йәш арыҫлан ҡыйыулана төшә. Мәмерйәгә ингәс, ҡарт арыҫлан уға бер аҙ ит бирә. Йәш арыҫлан ит еҫенән уҡшып, моронон ситкә бора. Әммә ҡарт арыҫлан уны ит ашарға мәжбүр итә. Йәш арыҫлан моронон ҡабаттан иткә яҡынайтҡанда ҡапыл ғына эсендә йәшеренгән ниндәйҙер тойғо уяна. Ул кинәнеп ит ашай башлай. Ит тәме аша уның булмышындағы кәзә булып мыҡрыҡлау юғала һәм үкереү барлыҡҡа килә. Үкергәндән һуң иһә йәш арыҫлан булмышында кәзә бөтөнләй юғала һәм ул ысын арыҫланға әйләнә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:** 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 1357